РСФСР ЮҒАРЫ ҺӘМ МАХСУС БЕЛЕМ МИНИСТЕРСТВОҺЫ
ОКТЯБРҘЕН 40 ЙЫЛЛЫҒЫ ИСЕМЕНДӘГЕ
БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ УНИВЕРСИТЕТЕ

КИРӘЙ МӘРГӘН

БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

Юғары уҡыу мәктәптәренең филология факультеттәре өсөн дәреслек

1981

(7—8 ижек) үлсәүен ҡабул иткән. Әммә бәйеттәрҙең ритмик төҙөлөшө һәм рифма системаһы бик ирекле һәм уларҙа дөйөм законсалыҡлы күренеш булып ойошҡан тотороҡло элементтәр юҡ тип әйтерлек.

Юғарыла әйтелгәнсә, бәйет сюжеттәрендә ваҡиға өсөнсө заттан, йә шул ваҡиғаның эсендә булған (һалдат образы һ. б.) исеменән, йә шул ваҡиғаға шаһит булыусы, күреүсе автор исеменән тасуирләнә. Шуға нисбәтән бәйеттәрҙең телендә лә күп төрлөлөк, сыбарлыҡ юҡ дәрәжәһендә. Күпселектә хикәйәләү тура телмәр (монолог) формаһында бара. Ҡара-ҡаршы һөйләшеү (диалог) формаһы бәйеттәрҙә бөтөнләй осрамай.

Бәйеттәрҙә ҡулланыла торған тасуирләү саралары башҡорт халҡының традициялашҡан поэтик мираҫы ерлегенән ситтә түгел, бәлки шул ерлектә барлыҡҡа килгән алымдарҙы сағылдыра.

Халыҡтың оҙон йырҙарында һәм күберәк ҡыҫҡа йырҙарҙа, таҡмаҡтарҙа ҡулланыла торған эпитеттәр, сағыштырыуҙар һәм телдең образлылығын көсәйтеү өсөн ҡулланыла торған башҡа төрлө (ескәләтеү, иркәләтеү һ. б.) саралар бәйеттәрҙә лә йыш осрай.

Йыйып әйткәндә, бәйеттәрҙең художество үҙенсәлеге, уларҙың тәбиғәтенә, юнәлешенә һәм ижад ерлегендә тотҡан идея-эстетик функцияһына бәйле барлыҡҡа килгән күренеш булып тора.

ӘҘӘБИӘТ

Башҡорт халыҡ ижады. Бәйеттәр. (Төҙөүселәре F. Хөсәйенов, М. Сәғитов). Өфө, 1978.

Мәҡәлдәр

Тормоштағы теге йәки был күренешкә ҡарата халыҡ тәжрибәһенең йомғағы рәүешендә, ҡыҫҡа һәм күсерелгән мәғәнәлә формалашҡан фекер, уй, һөйләмде м ә ҡ ә л тип йөрөтәләр.

Икенсе төрлө әйткәндә, мәҡәл тип, халыҡтың ҙур тормош тәжрибәһен туплаған, дидактик йөкмәткеле, образлы, ҡыҫҡа, ләкин тамамланған һөйләмдәргә әйтәләр.

Мәҡәлдәр халыҡ телендә быуаттан-быуатҡа күсеп килгән гүзәл хазиналарҙың береһе булып күҙ алдына баҫалар. Тулы бер мәғәнә аңлатҡан фекерҙе йыйнаҡ, оҫта, тапҡыр итеп әйтеп биргән мәҡәлдәрҙә халыҡ үҙенең быуаттар буйына һуҙылған тормош тәжрибәһен, яҡшы идеалға булған ынтылышын сағылдырып килгән.

Ғәҙәттә мәҡәлдәр тормошта осрай торған күренештәрҙе күҙәтеү йомғағы булып, ошо күренештәргә ҡарата кешеләрҙең аңында тыуған фекер һөҙөмтәһе булып барлыҡҡа килә. Йыш ҡына был һөҙөмтә дөйөмләштерелгән фекерҙе эсенә ала һәм тормошта була торған башҡа күренештәрҙе лә сағыштырып

ҡарарға ярҙам итә. Шул рәүешсә, былдай фекер һөҙөмтәһен сағылдырған тапҡыр һүҙҙәрҙә, йәғни мәҡәл булып ойошҡан фразеология байлығында, ниндәй ҙә булһа конкрет ваҡиға һәм конкрет күренештәр менән бергә, тормошҡа дөйөм ҡараш ташлау, дөйөм баһа биреүгә ынтылыу күренә. Шуның өсөн дә йыш ҡына бер күренешкә ҡарата сығарылған мәҡәлде икенсе күренешкә ҡарата ла, йәғни тура мәғәнәһендә лә, күсерелгән мәғәнәһендә лә, ҡулланып була. Әйтәйек, «Һоло ашамаҫ арғымаҡ, япраҡҡа моң булған» тигән мәҡәл конкрет тормош тәжрибәһе булып, йәғни малсылыҡ менән көн иткән кешеләрҙең күҙәтеү һөҙөмтәһе булып барлыҡҡа килгән. Ошо уҡ мәҡәлде кешеләр араһындағы ижтимағи тормошҡа ла күсереп була. Күсерелгән мәғәнәлә ҡулланғанда был мәҡәл «юнле аштан баш тартҡан әҙәм, насарынан буш ҡалған» тигән мәғәнә бирә. Йәғни һауаланып, башҡалар тәғәм иткән ризыҡты хуш күрмәй ҡупайып йөрөгән кеше, бер саҡ килеп бөтөнләй ас ҡаласаҡ, тигән һүҙ була. Шулай уҡ «Ни сәсһәң, шуны урырһың» тигән мәҡәл туранан-тура игенселек эшендә тыуған тормош тәжрибәһенең бер һығымтаһы булып яңғырай. Ләкин был мәҡәлде лә ижтимағи тормоштағы ҡайһы бер күренештәргә ҡарата күсереп ҡулланырға мөмкин. Был осраҡта инде ул «үҙең ни эшләһәң, шуны күрерһең» тигән мәғәнәне бирә. Йәки «Үгеҙ үкергәндә, мүскә мөскөлдәй» тигән мәҡәлдә үгеҙ һәм көсөк кеүек йорт малдарының конкрет хәрәкәте һәм торошо (үкереү һәм мөскөлдәп өрөү) тотоп алына. Был — тормошто күҙәтеүҙең конкрет һығымтаһы. Ләкин ошо уҡ мәҡәлде ижтимағи тормошҡа ла күсергәндә уның мәғәнәһе тағы ла киңәйә төшә. Мәҡәл «эшлекле кеше хәрәкәт иткәндә, булдыҡһыҙ бәндәләр ләстит һатып ултыра» тигән мәғәнәне аңлата.

Мәҡәлдәр тормош тәжрибәһен ни тиклем үткерерәк, тәрәнерәк һәм оҫтараҡ сағылдырһалар, уларҙың күсергән мәғәнәлә ҡулланыу сфераһы ла шул тиклем киңерәк була. Мәҫәлән: «Ике тәкә башы бер ҡаҙанға һыймаҫ» тигән мәҡәлде тәүҙә беҙ тура мәғәнәһендә ҡабул итәбеҙ. Күсерелгән мәғәнәлә уның бер ғаилә эсендә ике кешенең бер юлы баш була алмауына ишара яһалғанын күрәбеҙ. Унан һуң ошо уҡ мәҡәлде тағы киңерәк сфераға — бөтә ил (ырыу) күләменә күсереп ҡулланырға ла мөмкин. Ул саҡта ошо уҡ мәҡәл «бер илдә ике түрә (хан, батша) булмай» тигән мәғәнәне аңлата. Аҙаҡ килеп ошо мәҡәлде мөхәббәт сфераһына күсереп тә була. Был осраҡта ул «бер юлы ике кешене яратып булмай, йәғни бер йөрәккә ике мөхәббәт һыймай» тигән фекерҙе аңлата.

Мәҡәлдәргә классификация яһау шаҡтай ауыр һәм ҡатмарлы эш. Әгәр ҙә мәсьәләгә мәҡәл репертуарында телгә алынған нәмәләр, күренештәр (предмет) буйынса яҡын килһәк, төркөмдәрҙең һаны бик күбәйер ине һәм уларҙы бер-береһенән айырыу, төҫмөрләү мөмкинлеге кәмер ине. Дөрөҫ,

мәҡәл жанрына мөрәжәғәт иткән ғалимдәр араһында нәмә (предмет) буйынса ғына түгел, хатта алфавит буйынса тәртипкә һалыу күренеше лә осрай. Бынан башҡа тағы мәҡәлдәргә социаль-синфи дифференциация буйынса яҡын килеү (Ғ. Амантй), ғөрөф-ғәҙәт, әхләҡ нормаларын беренсе планға ҡуйып төркөмләү (Т. Баишев) һәм хатта субъектив-психик метод тигән атама алған тәртип (В. Даль) менән яҡын килеү күренештәре булғаны билдәле. Әлбиттә, классификация үҙе үк шартлы нәмә. Үрҙә һаналған тәртип һәм принциптәрҙең дә ыңғай һәм етешһеҙ яҡтары (береһендә әҙерәк, икенсеһендә күберәк) булғандыр. Ләкин эш шунда: мәҡәлдәрҙе мөмкин тиклем ойошҡаныраҡ, тулыраҡ, берҙәмерәк төркөмдәр аша күҙ алдына баҫтырыу ҡулайлы буласаҡ. Бына шул маҡсаттан сығып, мәҡәлдәрҙе тематик яҡтан төрөкмләү урынлы булыр һымаҡ.

Мәҡәлдәрҙә сағылыш тапҡан төп темаларҙың береһе — тыуған ил темаһы. «Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуғанүҫкән ил яҡшы» тигән боронғолар. Халыҡтың тыуған илгә булған мөхәббәтен сағылдырған тәрән патриотик мәҡәлдәр күп. «Үҙ илең — алтын бишек», «Аҫ туйған ерендә, ир тыуған илендә», «Иле юҡтың көнө юҡ» кеүек мәҡәлдәрҙә тыуған илдең бөйөклөгөнә, ҡиммәтенә баһа бирелһә, «Ил барҙа ир хур булмаҫ, ир барҙа ил хур булмаҫ» йәки «Илдең эше ирҙең муйынында, ирҙең эше илдең ҡуйынында» кеүек мәҡәлдәрҙә халыҡтың ошо изге көс алдындағы бурысы тураһында әйтелә. «Ир аҡылы бер алтын, ил аҡылы мең алтын» һәм «Берҙең көнө ил менән, илдең көнө ер менән» тибындағы мәҡәлдәрҙә инде ил хаҡын бергәләшеп ҡайғыртыу, ил бәхете өсөн күмәкләшеп хәрәкәт итеү кәрәклеге күрһәтелә. Ниндәй генә яҙмыш төшһә лә, ниндәй генә ауыр хәлгә ҡалһа ла, халыҡ күңеле тыуған тупрағына тарта. Шуның өсөн ул: «Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул» тигән тәрән мәғәнәле һығымта сығара.

Патриотизм тойғоһоноң көсө тыуған илде ололау, хөрмәтләү, уны һаҡлау юлында булған эштә, хәрәкәттә беленә. Был яҡлап Ватан темаһы ил ҡурғау, ил һаҡлау темаһына барып тоташа һәм, киңәйтеберәк әйткәндә, яу ҡайтарыу, батырлыҡ, егетлек, ҡыйыулыҡ тураһындағы мәҡәлдәрҙе бер төбәккә туплай. «Ир-егет үҙе өсөн тыуа, иле өсөн үлә», «Батыр даны көрәштә», «Батыр егет дау күрке», «Аттың даны егет ҡулында, егеттең даны үҙ ҡулында», «Күмәкләшкән — яу ҡайтарған» кеүек мәҡәлдәрҙә Ватан алдындағы изге бурысҡа халыҡтың һәр ваҡыт намыҫ менән ҡарағанлығын күреп була. Илде һаҡлауҙа күренгән батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, егетлек сифаттарын данлап, халыҡ киләсәк быуын өсөн изге васыят әйтеп ҡалдыра.

Мәҡәлдәрҙә шулай уҡ хеҙмәт темаһы киң урын алып тора. «Хеҙмәте барҙың — хөрмәте бар» тигәндәр. Халыҡтың

хеҙмәт һөйөүгә, ғилем-һөнәр алыуға, белемгә ынтылышын сағылдырған, уңғанлыҡты, тырышлыҡты данлаған һәм ялҡаулыҡты, һөнәрһеҙлекте, наҙанлыҡты фашлай торған мәҡәлдәр бик күп. «Ағас емеше менән, әҙәм эше менән», «Эш һөйгәндең ваҡыты етмәй, эшлекһеҙҙең ваҡыты үтмәй», «Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ», «Белемлегә йот юҡ, белемһеҙгә ҡот юҡ», «Тик тормаған — туҡ торған», «Тырышҡан — табыр, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр» тигән мәҡәлдәр ана шундайҙар.

Тормош-көнкүреш тәжрибәләрен сағылдырған мәҡәлдәрҙе халыҡтың быуаттар киңлегендә ойошоп формалашҡан милли традициялары, гөрөф-гәҙәт һәм йолаларҙағы үҙенсәлектәр асыҡ төҫмөрләнә. Был яҡлап, бигерәк тә, аҡыл менән эш итеү, өгөт-нәсихәт, мораль, тәрбиә, ҡылыҡ нормалары һәм ғаилә мөнәсәбәттәре тураһындағы мәҡәлдәр характерле. Мәҫәлән, «Ҡаҡма кеше ҡапҡаһын, үҙ ҡапҡаңды ҡағырҙар», «Асыу — дошман, аҡыл — дуҫ, асыуыңа аҡыл ҡуш», «Таш менән атҡанға аш менән ат» кеүек мәҡәлдәрҙә халыҡ әхләҡ-тәрбиә нормаларын алға баҫтырһа «Бишектәге бала биш төрлөгә әйләнә», «Бала көйөгө йөрәктә, ир көйөгө итәктә», «Атаһы болан алмағандың балаһы ҡолан алмаҫ», «Ир — беләк, ҡатын — терәк» тигән мәҡәлдәр аша ғаилә эсендәге мөнәсәбәттәрҙе ҡанунлаштыра. Халыҡҡа хас булған ҡунаҡсыллыҡ сифаты мәҡәлдәрҙә айырыуса урын ала. «Икмәк-тоҙ — яҡты йөҙ», «Таҡта сәйем — асыҡ сырайым», «Йәш оло түгел, аш оло», «Ҡунаҡ килһә, ҡапҡаң ас», «Яҡшы хужаның ашы татлы» һәм башҡа шундай күп һандағы мәҡәлдәр һый-хөрмәт, ҡунаҡ-төшөм, аш-һыу өлкәһендә лә халыҡ күңеленең сафлығы, киңлеге, йомартлығы сағылғанын күрһәтәләр.

Халыҡтың ҡатмарлы ижтимаги тормошон сағылдырған мәҡәлдәрҙе тематик яҡтан бер нисә төркөмгә бүлергә мөмкин. Ләкин бындай мәҡәлдәрҙең бөтәһе өсөн дә уртаҡ мотив булып халыҡ яҙмышы темаһы тора. Социаль тигеҙһеҙлек хөкөм һөргән шарттарҙа «ҡайҙа барһаң да ҡара һаҡалың артыңдан ҡалмай». Шуға ҡарамаҫтан, тормошто үҙгәртергә, яҡшыртырға ынтылыу теләге халыҡ күңеленән китмәй. Сөнки халыҡ «үҙ урамында да байрам булыуына, үҙ табынына ла туй килеүенә» ныҡ ышана.

Яҙмыш тематикаһын сағылдырған мәҡәлдәрҙең күпселеге халыҡ тормошондағы ауырлыҡтың, ғәҙелһеҙлектең сығанағы синфи тигеҙһеҙлеккә барып тоташҡанлығын бик дөрөҫ күрһәтә. Тормоштағы ғәҙелһеҙлек синфи ҡаршылыҡтар нигеҙендә тыуа. Тап шул арҡала берәүҙәр байыға, берәүҙәр бөлә һәм ярлылана, берәүҙәр иҙә, берәүҙәр иҙелә. Сөнки синфи йәмғиәттә «берәү үлмәй, берәү көн күрмәй». Бөтә яуызлыҡ ана шул хосуси милеккә, байлыҡҡа барып тоташа. Сөнки «байлыҡ — кешенең күңелен ташҡа, күҙен аҡҡа әйләндерә».

Мәҡәлдәрҙә халыҡ һәр төрлө эксплуататорҙарҙың, байҙарҙың, муллаларҙың, бейҙәрҙең, хандарҙың дөйөмләштерел-

гән ҡомһоҙ һәм кешелекһеҙ образын тыуҙырған. Ғазраил халыҡты йән алыу менән ҡурҡытһа, бай малын тартып алыу менән ҡурҡыта. Шуның өсөн дә «бай бар ерҙә, малым бар, тимә; ғазраил бар ерҙә, йәнем бар, тимә». Байҙың байлығы халыҡтың хәләл ҡанын эсеү арҡаһында йыйыла. Был турала халыҡ былай тигән: «Байҙың малы — ярлының ҡаны», «Байҙарға көн дә байрам, көн дә туй, ярлыға көн дә хәсрәт, көн дә уй», «Бай байыға, ярлы ябыға» һ. б.

Иҙеүсе синыф вәкилдәренең дөйөмләштерелгән образы аша халыҡ байҙарҙың, хандарҙың һәм бейҙәрҙең йыртҡыслығын фашлай. «Батыр уртаҡ, бей уртаҡ: береһе илгә дан килтерә, икенсеһе — ҡан килтерә», «Хан күп булһа — яу күп була, бей күп булһа — дау күп була», «Хан юлында ҡан ята», «Хан килә, хан килә, хан артынан ҡан килә» һ. б. Байҙар һәм бейҙәрҙең йыртҡыслығынан мал биреп тә ҡотолоп булмай, улар барыбер һинең ауыҙыңды ҡанатасаҡ. Быны дөйөләштереп, халыҡ: «Биргән бейгә яраған, ауыҙ-мороно ҡанаған», ти.

Тормош ауыр булһа ла был хәлдәрҙән халыҡ үҙе өсөн оптимистик һығымта яһай: «Кешегә көнөң төшмәһен, байға юлың төшмәһен», «Көлдә аунаһаң да үҙ көнөңдө үҙең күр», «Бай ҡаршына барма, башың утҡа һалма», «Байлыҡ морат түгел, ярлылыҡ оят түгел».

Башҡортостан ерлегендә капиталистик мөнәсәбәттәр килеп инеүе һәм киңәйеүе һөҙөмтәһендә халыҡ тормошонда барлыҡҡа килгән күренештәр халыҡ ижадындағы социаль мотивтәрҙе тағы ла үткерләштерәләр. Был күренеш мәҡәл репертуарында ла яңылыҡ индерә. Капитализм шарттарында аҡсаның көсөн һәм тотҡан урынын һәм шул арҡала халыҡтың тормошо тағы ла ауырлаша барыуын күрһәткән мәҡәлдәр тыуа. Был тәңгәлдә «Аҡсаны аҡса таба», «Аҡса таш аҫтында, таш аждаһа башы аҫтында» кеүек мәҡәлдәрҙе күрһәтергә мөмкин.

Өҫтөнлөк итеүсе синыф вәкилдәре, халыҡты ҡыҫынҡылыҡта, ҡараңғылыҡта тотоу һәм халыҡтың аңын томалау маҡсатында, халыҡ ижадын үҙенең синфи теләгенә ҡулайлаштырырға тырышалар. Мәҡәл кеүек хәрәкәтсән ижад тәрәнә лә йоғонто яһамай ҡалмайҙар. Шул юл менән халыҡты пассивлеккә өндәү идеяларын сағылдырған мотивтәр ҙә килеп инә. «Ашау — байҙан, үлем — хоҙайҙан», «Түрә барҙа түргә уҙма», «Ҡоро ҡалаҡ ауыҙ йырта», «Яҙмыштан уҙмыш юҡ», «Эйелгән башты ҡылыс ҡырҡмай», «ырыуына күрә йолаһы, саҙаҡаһына күрә доғаһы» һәм башҡа шундай типтағы мәҡәлдәр ана шул рәүешсә халыҡ аңына иҙеүсе синыф тарафынан индерелгән күренештәр, иҫкергән йолаларҙы һәм кеше аңындағы иҫке ҡалдыҡтарҙы сағылдырған күренештәр булып торалар.

Ләкин был күренештәр, халыҡ ижадында, ғөмүмән, осраҡлы булған кеүек, мәҡәлдәрҙә лә халыҡ йөрәге өсөн ят

булған, халыҡ аңына ситтән килеп ингән яһалма, зарарлы ҡатлам булып торалар. Шуның өсөн дә халыҡ үҙе үк ул күренештәргә ҡаршы сыға һәм был хәл мәҡәлдәрҙең үҙендә үк сағыла. Халыҡ: «Байлыҡ — байлыҡ түгел, берлек — байлыҡ» тигән һөҙөмтә сығара. Пассивлеккә өндәүгә буйһоноу идеяларына ҡаршы халыҡ: «Дошманды ҡуй тип уйлама, ул — бүре», «Дуҫтан дошманды айыра бел», «Йыландың ағы ла йылан, ҡараһы ла йылан», «Йылан менән дуҫ булһаң, ағыуланырһың», «Йыландың ҡойроғона баҫма, башына баҫ» кеүек активлеккә, хәрәкәткә өндәүсе тәрән мәғәнәле мәҡәлдәр ижад итә һәм уяу булырға, ысын дошманын күрә белергә, дошмандарға ҡаршы актив хәрәкәт итергә саҡыра.

Мәҡәлдәрҙең художество үҙенсәлектәре

Халыҡтың художестволы фекерләү үҫешендә мәҡәлдәрҙең тотҡан урыны бик ҙур. Мәҡәлдәрҙең тормоштағы һәм халыҡтың аң үҫешендәге әһәмиәтен билдәләп, халыҡ: «Йөҙ күрке — һаҡал, һүҙ күрке — мәҡәл» тигән гүзәл фекер әйтеп ҡалдырған. «Һүҙ башы — мәҡәлдә», «Мәҡәлле һүҙ — аҡыллы һүҙ», «Мәҡәл — һүҙ асҡысы, әйтем — күңел асҡысы», «Мәҡәл әйткән — юл өйрәткән, әйтем әйткән — күңел йыуатҡан» кеүек мәғәнәле һүҙҙәрҙе беҙ халыҡтың был жанрға ҡарата булған талабын һәм мәҡәл менән эш итеүсе һүҙ оҫталарын ололап баһалауын күрәбеҙ.

Мәҡәлдәрҙә тормошта осрай торған күренештәрҙең төп айышы, ғәҙәттә, ниндәй ҙә булһа художестволы образ аша бирелә. Әлбиттә, ошо образға ҡарата халыҡ күңелендә барлыҡҡа килгән, йәки һығымта (мораль) көсләп тағылмай, бәлки кәүҙәләнеү объекты булған күренеш йәки әйберҙең сағылышы булып барлыҡҡа килгән был образ, үҙе тыңлаусыны кәрәкле һығымтаға алып килә.

Ләкин художестволы образ урынына күтәрелгән күренеш халыҡҡа яҡын һәм аңлайышлы булырға тейеш. Тик шул саҡта ғына мәҡәлдең көсө, тәьҫире ҙур була һәм уны конкрет тарихи шарттар эсендәге ваҡиғаларға, күренештәргә ҡарата күсереп аңлау мөмкинлеге тыуа. Алынған ваҡиға һәм күренештәр һәм уларҙың сағылышы булып күтәрелгән образ халыҡҡа барып етеү көсөн юғалтҡан булһа, ундай мәҡәлдәрҙә архаизм еҫе аңҡый башлай һәм улар әкренләп йәнле репертуарҙан төшөп ҡала баралар. Әлбиттә, халыҡтың художестволы фекерләү тарихен һәм үҫешен тикшергәндә, тел, стилистика ҡоролошоноң үҙенсәлектәрен күҙәткәндә, бындай мәҡәлдәрҙең шулай уҡ әһәмиәте ҙур. Ләкин инде улар халыҡтың бөгөнгө йәнле аҡыл шишмәһенең көҙгөһө булып күтәрелә алмайҙар.

Шулай итеп, мәҡәлдәрҙәге образлылыҡ саралары ябай ҙа, тәьҫирле лә, тәбиғи ҙә булырға тейеш.

Иң тәүҙә мәҡәлдәрҙең композицион ҡоролошона күҙ ташлап үтеү урынлы булыр һымаҡ. Ҡоролош йәһәтенән башҡорт халыҡ мәҡәлдәре араһында өс төрлө күренеш күҙәтеп була: 1) хәбәр һөйләү, хәбәр итеү формаһында ойошҡан мәҡәлдәр; 2) тура телмәр (монолог) формаһында ойошҡан; 3) ҡара-ҡаршы һөйләшеү (диалог) формаһында ойошҡан мәҡәлдәр.

Мәҡәл репертуарының иң күп өлөшөн хәбәр биреү, хәбәр итеү формаһында ойошҡан мәҡәлдәр тәшкил итәләр. Әйтәйек, «Ат аунаған ерҙә төк ҡала», «Ашыҡҡан — ашҡа бешкән», «Алабута аш булмаç, алтын-көмөш таш булмаç», «Ҡатыҡ эскән — ҡотолған, ҡалаҡ ялаған — тотолған» һ. б. Бындай типтағы мәҡәлдәр, күренеүенсә, теге йәки был күренеш, ваҡиға тураһында хәбәр бирәләр. Йәғни меңәр йыллыҡ тормош эсендә алып барылған күҙәтеү һығымтаһын беҙгә еткерәләр. Шул рәүешсә, хәбәр биреү тәртибендә ойошҡан мәҡәлдәр репертуарҙың иң күп өлөшөн тәшкил итәләр һәм хатта жанрҙың тәбиғәтен, юнәлешен, йәшәү формаһын билдәләп торалар.

Тура телмәр (монолог) рәүешендә ойошҡан мәҡәлдәрҙә мәғәнәле һүҙ күптән билдәле булған объектив фекер, һығымта формаһында әйтелмәй, бәлки һөйләүсенең үҙ күҙәтеүе, үҙ фекере рәүешендә еткерелә. Йәғни мәҡәлде ҡулланған кеше шунда хәбәр ителә торған күренеш йәки ваҡиға эсендә үҙе лә ҡатнашҡан әҙәм һымаҡ һөйләй. Гәрсә ул ҡулланған мәҡәл шулай уҡ быуаттарға һуҙылған күҙәтеү һөҙөмтәһе сифатында барлыҡҡа килгән булһа ла, һөйләүсенең үҙ күҙәтеүе, субъектив фекере һымаҡ яңғырай. Мәçәлән, «Ҡәйнәгә килдем — михнәт күрҙем, ҡәйнә булдым — михнәт бирҙем», «Мин тартам табаҡҡа, ул тарта тағараҡҡа», «Ҡәйнә ҡулына килдем, ҡайғы түренә мендем», «Баш көн килде байым — алып китте бисәмде, буш көн килде байым — килтереп ҡуйҙы бисәмде» һ. б.

Күренеүенсә, бындай типтағы мәҡәлдәрҙә һүҙ беренсе зат исеменән алып барыла. Шуның өсөн тура телмәр тибындағы мәҡәлдәрҙең бер өлөшө теге йәки был күренешкә ҡарата һөйләүсенең (беренсе заттың) эмоцияһын белдергән кеүек, йә хуплауын, йә кире ҡағыуын, йә булмаһа тәьçирләнеүен белдергән һымаҡ яңғырай. Шул сәбәпле бындай мәҡәлдәрҙә ымлыҡтар ҡулланыу йыш ҡына осрай (һорау биреү, һоҡланыу, мөрәжәғәт итеү формаһында). Ләкин мәҡәлдәге фекер (образ) күсерелгән мәғәнәлә ҡабул ителгәнгә күрә был ымлыҡтар (һоҡланыу, ымһыныу һ. б.) йыш ҡына кире мәғәнә аңлаталар, йәғни кинәйәле көләү булып яңғырайҙар. Мәçәлән: «Алла билем, тоҡ күтәргән ирем», «Атай, атты үҙең ал, арғымаҡты миңә бир», «Бир ҡулыңды — батам, тот ҡулымды — тартам» (кеше елкәһендә йәшәргә өйрәнгән бәндәләрҙән кө-

ләү), «Һин дә мулла, мин дә мулла, атҡа бесән кем һала?», «Һинеке — минеке, минеке — үҙемдеке!»

Ҡара-ҡаршы һөйләшеү (диалог) тибында ойошҡан мәҡәлдәрҙә тормош тәжрибәһе (һығымта) булараҡ килгән мәғәнәле фекер ике кешенең ҡара-ҡаршы әйтешеүе, һорау-яуап алышыуы формаһында еткерелә. Мәҡәл ике кеше әңгәмәһенең бер өҙөгө һымаҡ яңғырай. Мәҫәлән: «— Дуҫың кем? — Ирем. — Дошманың кем? — Ирем»; « — Әжәл, ҡайҙа бараһың? — Барҙың малын сәсмәгә, юҡтың артын асмаға». « — Эт, ниңә өрәһең? — Бүрене ҡурҡытам. — Эт, ниңә мөскөлдәйһең? — Бүренән ҡурҡам» һ. б.

Күренеүенсә, был миҫалдар әйтелергә тейеш булған мәғәнәле фекерҙе ике кешенең һөйләшеүе һорау-яуап алыныуы тәртибендә еткерәләр.

Мәҡәлдең конструкцияһы нисек төҙөлгән булыуға ҡарамаҫтан, уның төп бурысы ниндәй ҙә булһа күренештең, ваҡиғаның һығымтаһын еткереүгә ҡайтып ҡала. Күҙәтеү һөҙөмтәһе булып килгән был һығымта, иң тәүҙә ҡыҫҡа, аңлайышлы һәм, әлбиттә, образлы яңғырарға тейеш. Ошо талаптарға ярашлы рәүештә мәҡәлдең конструкцияһы күпселектә ике тиң киҫәктән ойоша. Грамматик (синтаксик) яҡтан ҡарағанда, был киҫәктәр ябай һөйләмдең состав өлөштәре (эйә менән хәбәр) йәки ҡушма һөйләмдең ике бер тиң өлөшө сифатында ҡабул ителәләр. Мәҫәлән, «Әйткән һүҙ — атҡан уҡ» тигән мәҡәлде алайыҡ. Күренеүенсә, был ябай һөйләмдең бер өлөшө эйә (әйткән һүҙ), бер өлөшө хәбәр (атҡан уҡ) булып килгән. Ҡушма һөйләм формаһында ойошҡан мәҡәлдәрҙә лә шундай уҡ хәл. («Ир уңмағаны икмәкһеҙ булыр, ҡатын уңмағаны күлдәкһеҙ булыр», «Ирҙең атын ҡатын сығарыр, ҡатындың атын утын сығарыр» һ. б.).

Һәр бер мәҡәл тулы мәғәнә бирергә, тыңлаусыла тулы образ тыуҙырырға тейеш. Мәғәнә тулылығы ана шул тиң киҫәктәрҙең үҙ-ара бәйләнеше менән йәғни үҙ-ара мөнәсәбәттәренең ниндәй характерҙа булыуы менән билдәләнә. Юғарыла килтерелгән миҫалда күренгәнсә, был ике киҫәк араһындағы мөнәсәбәт һөйләмдә эйә менән хәбәр мөнәсәбәте булып күҙ алдына баҫа. Ә инде ҡушма һөйләм формаһында ойошҡан мәҡәлдәр ике төп киҫәктең йәнәшә килеүе принцибендә барлыҡҡа киләләр. Бындай осраҡта ике бер тиң киҫәктең (һөйләмдең) береһе — баш һөйләм була, икенсеһе эйәрсән һөйләм сифатында бәйләнеп килә. Йәғни был киҫәктәрҙең береһе төпхәлдә аңлата, йәғни образ өсөн нигеҙ булып алынған төп күренеш (ваҡиға) тураһында хәбәр итә. Ә икенсеһе, уға ҡушылып килгәне, шул төп хәлдең, йәғни төп образдың тыуыу шартын, барлыҡҡа килеү сәбәбен һәм күҙгә күренеү ваҡытын күрһәтә. Мәҫәлән: «Ата алмаған — атынан күргән», «Юкә өҙһәң, ҡайыш түләрһең», «Ашамай тамаҡ туймай, эшләмәй ризыҡ булмай» (сәбәп шарт), «Ерле — ерендә, екән

күләндә» (урын шарт), «Атты айһыҙ маҡтама, ҡатынды йылһыҙ маҡтама», «Ашты һеңгәс маҡта, юлдашты белгәс маҡта» (ваҡыт шарты) һ. б.

Шул рәүешлә, ике бер тиң киҫәктән (һөйләмдән) ойошҡан мәҡәлдәрҙә үҙенән үҙе йәнәшәлек (параллелизм) алымы килеп инә. Йәғни бындай типта ойошҡан мәҡәлдәрҙә образ йәнәшәлек алымы аша көсәйтелә. Башҡа художестволы әҫәрҙәрҙәге кеүек мәҡәлдәрҙә лә нигеҙҙә йәнәшәлектең ике төрлө формаһы ҡулланылыусан.

Бер-береһенә оҡшаш, йәғни тиң күренештәрҙе йәнәшә ҡуйыу юлы менән барлыҡҡа килгәндә ыңғай йәнәшәлек булһа, бер-береһенә оҡшамаған, йәғни тиң булмаған, ҡапма-ҡаршы күренештәрҙе йәнәшә ҡуйып сағыштырыу юлы менән барлыҡҡа килгән хәлдә тиҫкәре йәнәшәлек (антитеза) төҫөн ала.

Мәҫәлән, «Ат яҡшыһы алға сыға, ир яҡшыһы данға сыға», «Ат туйған ерендә, ир туған илендә», «Тауҙың күрке таш менән, илдең күрке аш менән» тибындағы мәҡәлдәр ыңғай йәнәшәлеккә миҫал булалар. Ә инде: «Бауҙың оҙоно яҡшы, һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы», «Аяҙ көндө йоҡлап ята, болот көндө бесән саба», «Сысҡанға үлем, бесәйгә көлкө» тибындағы мәҡәлдәрҙе тиҫкәре йәнәшәлек үрнәге итеп алырға мөмкин.

Мәҡәлдәрҙең художестволы ҡоролошонда һүҙҙең үлсәүле булыуы ҙур урын тота. Халыҡ: «Өлгөлө һүҙҙең дә үлсәүе бар» тигән. Һәр мәҡәлдең үҙенә хас эске ритмикаһы була һәм был ритм һүҙ әйтешенең гармониялы ағышына буйһона. Мәҡәлдәге ритм — мәғәнәле фекерҙең теүәллеген тәьмин итә, уға шиғри юнәлеш бирә, тәьҫирлерәк яңғырарға ярҙам итә.

Мәҡәл ритмикаһы шиғыр ритмикаһынан ситтә түгел, бәлки шул уҡ законсалыҡты ҡабул иткән. Тиң киҫәктәрҙән ойошҡан мәҡәл ул бер үк төрлө шиғыр юлдарына ойошҡан әҫәр кеүек ҡабул ителә. Шуның өсөн уларға шиғри юлдарға яҡын килгән үлсәм менән мөрәжәғәт итергә тура килә.

Мәҡәлдең төбө — һүҙ, тибеҙ икән, тимәк, образлы мәғәнә — бирерлек мәҡәл булып ойошҡан һөйләм дә һүҙҙәр теҙмәһенән тора. Һәр бер һүҙҙең үлсәме бар. Әйтәйек, һүҙҙең ике ижеклеһе була, биш-алты (хатта күберәк) ижеклеһе була. Мәҡәл жанры уларҙың бөтәһен дә үҙенсә файҙалана.

Беҙҙә һәр юлы икешәр ижектән торған мәҡәл осрамай. Ләкин теоретик яҡтан уның булыуы ихтимал. Уның ҡарауы беҙҙә өс ижекле мәҡәл (шиғыр) юлдары бар.

Әйтһәң — һүҙ,
Тартһаң — күҙ.

Ике юлдан торған шиғыр (ике тиң киҫәк) булып күҙ алдына баҫҡан был мәҡәлдә әйтелгән фекер ҙә тамамланған, ритмикаһы ла һүҙ тейҙерерлек түгел — теүәл. Дүрт ижекле (шиғыр) юлдарынан торған мәҡәлгә миҫал:

Туйым уҙған,
Туным туҙған.

Һындай миҫалдарҙы һәм күберәк ижекле (дүрт-биш, етеһигеҙ һ. б.) юлдарҙан ойошҡан мәҡәлдәрҙе күп килтерергә мөмкин. Шуныһы мөһим: был юлдарҙа һүҙҙәр нисек етте шулай теҙелмәй, бәлки төрлө баҫымлы һүҙҙәрҙең органик аралашыуы нигеҙендә барлыҡҡа килгән системалы быуындар теҙмәһе рәүешендә күҙ алдына баҫа.

Мәҡәлдәрҙәге шиғри юлдарҙың эске ритмика быуындарын байҡауҙы ҡалдырып (сөнки шиғри әҫәрҙәрҙә был күренеш ярайһы уҡ тикшерелгән), мәҡәлдәрҙең тышҡы сифаты өсөн хас булған тағы бер күренешкә күҙ ташлап алайыҡ. Эш шунда: мәҡәлдәге тиң киҫәктәр (шиғри юлдар) шул тиклем тығыҙ ойошҡан ки, уларға бер ижек тә өҫтәп булмай. Өҫтәлһә артыҡ була, йәме китә, шиғри тәме юғала. Сөнки меңәр йылға һуҙылған ижад ҡаҙанында ҡайнашып мәҡәл юлдары ҡанунлашҡан бер ҡалыпҡа әйләнгән һәм әйтеләһе фекер, мотлаҡ шул «ҡалып»ҡа һыйып бөтөргә тейеш була. (Шартлы рәүештә был күренеште «ҡалыплашыу» тип атарға мөмкин).

Мәҡәлдәрҙең төп сифаты — мәғәнә теүәллеге тип әйтелде. Ләкин был теүәллек ваҡиғаны (образды) киңәйтеп хәбәр итеү аша түгел, бәлки, киреһенсә, ҡыҫҡалыҡ аша ирешелә. Тәү ҡарауға был күренеш ярашмаған (парадокс) кеүек күренә. Ләкин эш тап шулай: ҡыҫҡалыҡ — теүәлләнеүҙең бер сараһы булып тора һәм мәҡәлде мәҡәл яһаған һөйләмдең артыҡ күренгән өлөштәре төшөрөлгән һайын ул шымара, үткерләнә, йәғни үҙ «ҡалыбына» ултыра бара һәм уның образлы тәьҫирен көсәйтә бара. Мәҫәлән, мәҡәлдә, *менән, ә, ләкин, кеүек, әгәр* тибындағы теркәүестәр бөтөнләй төшөп ҡалалар. Бына «Дуҫың дуҫ булһын, иҫәбең дөрөҫ булһын» тигән мәҡәлде алайыҡ. Нормаль төҙөлгәндә ул түбәндәгесә яңғырар ине: «Дуҫың дуҫ булһын, *ләкин* иҫәбең дөрөҫ булһын». Ә мәҡәл өсөн ул «ләкин» артыҡ. Хатта уны ҡулланған хәлдә был һөйләм мәҡәллеген юғалтҡан кеүек була. Мәҡәл тамамланған фекерҙе ыҡсым рәүештә «ләкин»һеҙ генә тыңлаусыға еткерә.

Түбәндәге миҫалдарға күҙ ташлап алайыҡ: «Серҙе сискән күп булыр, (әммә, ләкин) серҙе тотҡан бер булыр» «(әгәр) атың айғыр булһа, ят та ҡайғыр», «Ирһеҙ ҡатын — югәнһеҙ ат (кеүек)», «Атың яман булһа һатып ҡотолорһоң, (ә) бисәң яман булһа нисек ҡотолорһоң?» һ. б. Күренеүенсә, «Әммә», «ләкин», «әгәр», «ҡалыпҡа» һыймай төшөп ҡалалар һәм был хәл мәҡәл ҡоролошона ыҡсымлыҡ, теүәллек индерә.

«Ҡалыплашыу»ға ынтылышты башҡа миҫалдар менән дә дәлилләп була. Мәҡәлдә шулай уҡ ялғауҙар, ҡушымталар төшөп ҡалыусан. Мәҫәлән: «Аҡ эт(тең) бәләһе, ҡара эткә», «Ҡыш(тың) ҡорһағы оҙон», «Аҡыллы(ның) абруйы, иҫәр янында күренер», «Уйлаһаң бер уй, тәүҙә уҫаллығың)ды)

ҡуй», «Йоморо телең(де) яҫы итерһең, яҫы телең(де) таҫма итерһең» һ. б. Унан башҡа тағы мәҡәлдә эйәһеҙ һөйләм формаһы киң ҡулланылыуын әйтеп үтергә кәрәк. Эйә рәүешендә күренергә тейеш субъект шулай уҡ, йыш ҡына төшөп ҡала, уның функцияһы алдынан килгән сифат йәки ҡылымға бирелә. Мәҫәлән: «Алған (кеше) бер яҙыҡлы, алдырған (кеше) мең яҙыҡлы», «Аҡыллы (әҙәм) атын маҡтар, тиле (кеше) бисәһен маҡтар», «Айыуҙан ҡасҡан (кеше) бүрегә юлыҡҡан», «Ат менмәгән (бәндә) ат менһә саба-саба үлтерер, тун күрмәгән (бәндә) тун күрһә, ҡаға-ҡаға бөтәрер», «Алдан килгән (кеше, ҡунаҡ) урын өсөн, арттан килгән (кеше, ҡунаҡ) тамаҡ өсөн» һ. б. Былар бөтәһе лә мәҡәлде еткереү (хәбәр итеү) ысулын еңеләйтә, уларҙың тәьҫир көсөн арттыра.

Шиғри ижадтың төп элементтәренән береһе булған р и ф м а л ы л ы ҡ мәҡәлдәр өсөн дә хас күренеш. Мәҡәлдәрҙәге бер нисә һөйләмдән торған тиң киҫәктәр, ҡағиҙә рәүешендә, үҙ-ара рифмалашыу юлы менән берләшәләр. Рифма ҡоролошо үҙ нәүбәтендә эске ритм менән тығыҙ бәйләнгән була.

Мәҡәлдәрҙә рифманың һәр төрлөһөн осратырға мөмкин. Шиғырҙа нисек булһа — мәҡәлдәрҙә лә шулай: парлы рифма редиф, эске рифма, юл башы рифмаһы. Эпифора, анафора күренештәре киң урын алған.

Парлы рифмаға миҫал:

Бай бай өсөн *тырышыр,*
Ярлы ярлыға *булышыр.*

Эске рифмаға миҫал:

Берәү *туйып* һикерә,
Берәү *туңып* һикерә.

Юл башы рифмаһы:

Алтынды эҙлә таштан,
Аҡылды эҙлә баштан.

Күренеүенсә, был ике юлдың рифмалашыуы хатта ике яҡлап — баштан да, аҙаҡтан да килә. Образлы фекерләү практикаһының гүзәл күрһәткесе булған бындай күренештәрҙе мәҡәлдәрҙә күп табырға мөмкин.

Редифле юлдарға миҫал:

Малы юҡтың — көнө юҡ,
Көнө юҡтың — өнө юҡ.

Эпифора (юл аҙағында бер үк һүҙҙәрҙең ҡабатланыуы) күренеше шулай уҡ йыш осрай:

Арғымағың яманлап,
Ҡайҙан толпар тапҡаның?
Ағай-энең яманлап,
Ҡайҙан туған тапҡаның?

Шулай уҡ анафора (юл башында уҡ һүҙҙәрҙең ҡабатланып килеүе) күренеше лә мәҡәлдәр өсөн ят түгел:

Яҡшы күргән кешегә
Яҡшы күргән малың бир —
Күрә-күрә һөйөнһөн.
Яман күргән кешегә,
Яман күргән малың бир —
Күрә-күрә көйөнһөн.

Бындай миҫалдарҙы, күп килтерергә мөмкин. Шуныһы мөһим: рифмалылыҡ шул уҡ маҡсатҡа буйһона, йәғни мәғәнәле образлы фекерҙең теүәл, ыҡсым, тәьҫирле яңғырауына иерешеүҙең бер сараһы булып хеҙмәт итә.

Мәҡәлдәрҙең художество ҡоролошона үҙенсәлек биреп, матурлап һәм биҙәп торған тағы ла бер күренеш бар, ул — мәҡәлдәргә ингән айырым һүҙҙәрҙәге өндәрҙең үҙ-ара гармониялы бәйләнеше (аллитерация, ассонанс) закондарын ҡулланыуҙан тора.

Аллитерация (тартынҡы өндәрҙең гармониялы ҡабатланыуы) күренеше мәҡәлдәрҙә йыш осрай. Мәҫәлән: «Боралҡынан берәү килһә, боронғоға урын юҡ» (б, р) «Ҡайғы юҡтан ҡайғы булды ҡәйнәмдең ҡара ҡайғыһы» (ҡ) «Һигеҙ һыйыр аҫырағансы, һимеҙ һыйыр аҫыра» (һ). Ассонанс (һуҙынҡы өндәрҙеъң ҡабатланыуы) күренеше лә мәҡәлдәр өсөн ят түгел. Мәҫәлән, «Алты аҙым алға атла, алтмыш тапҡыр артыңа ҡара» (а), «Алты йәшәр ауылға ҡайтһа, алтмыш йәшәр артынан килер» (а). Шулай уҡ тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙең аралашып гармониялы мөнәсәбәткә инеүҙәрен күрһәткән миҫалдарҙы ла осратып була: «Өлөшөңә төшкән көмөшөң» (ө, ш). «Бараманың бар булһын, барһаң байрам итерһең» (б, р, а). Был миҫалдар бөтәһе лә мәҡәлдәрҙең поэтикаһын үҙенсәлекле байыҡтырып, тулыландырып торалар һәм мәғәнәле һүҙҙең теүәл яңғырашына хеҙмәт итәләр.

Мәҡәлдәрҙең художество үҙенсәлеген билдәләй торған тағы бер күренешкә иғтибар итмәй үтеү мөмкин түгел. Халыҡ ижадында киң таралған юмор, сатира, ирония, сарказм алымдары мәҡәлдәрҙә тойолорлоҡ күҙгә бәреләә. Халыҡ тормошонда осрай торған етешһеҙ күренештәрҙе фашлау, айырым шәхестәр өсөн, бигерәк тә иҙеүсе синыф вәкилдәре өсөн, хас булған оятһыҙ сифаттарҙан көлөү, мыҫҡыллау, юҡҡа сығарыу тенденцияһы мәҡәл репертуарында киң сағыла. Был хәл мәҡәлдәрҙең художествоүҙенсәлегенә айырым төҫ, юнәлеш, интонация бирә, һүрәтләү сараларын байыҡтыра һәм төрләләндерә. Мәҫәлән, сағыштырыу юлы менән ойошҡан «Эт артында — ҡойроҡ, түрә артында — бойороҡ» тигән мәҡәлде генә алып ҡарайыҡ. Халыҡ түрә артынан килгән бойороҡто, эт артынан эйәргән ҡойроҡ менән тиңләп, түбәнһетә, асы мыҫҡыллай.

Сатирик алымдың көсө был мәҡәл миҫалында бик асыҡ күренә.

Еңел юмор, кинәйәгә ҡоролған мәҡәлдәрҙә күберәк айырым шәхестәрҙә күренгән кәмселектәр: ялҡауҙыҡ, ярамһаҡлыҡ, аңралыҡ, наҙанлыҡ, мин-минлек, булдыҡһыҙлыҡ күренештәре тәнҡит ителә. Мәҫәлән, «Аяҙ-аяҙ көндәрҙә йоҡлап ятыр Ялсығол, буран-буран көндәрҙә утын ташыр Ялсығол» тигән мәҡәлдә тормошта һәләтһеҙлек күрһәткән шәхестең йәтешһеҙ хәрәкәте тыңлаусыла еңелсә көләү тойғоһо уята. Һәм бындай хәлдәр тормошта йыш ҡына күренгәнлектән, мәҡәлдәге ваҡиғаны һәм уға бәйләнеп тыуған конкрет шәхестең хәрәкәтен халыҡ дөйөмләштереп, йәғни шундай уҡ күренештәргә күсереп ҡабул итә. Тимәк, конкрет шәхес һәм уның эше художестволы образ булып күтәрелә. Ошо образ аша һәр эште белеп эшләү кәрәк, һәр эштә уңғанлыҡ, һәләтлелек кәрәк тигән идея үткәрелә.

Ирония (аҫтыртын көләү) булып яңғыраған мәҡәлдәрҙе лә күп кенә осратып була. Был осраҡта етешһеҙ күренештәрҙе фашлау маҡсатында алынған деталь (образ) үҙ маҡсатына кире мәғәнә тыуҙырыу аша ирешә. Йәғни ыңғай күренеш тип тәҡдим ителгән ваҡиға тыңлаусыны кире һөҙөмтәгә килтерә, мәҡәлдең үҙ һүҙе менән әйткәндә, ирониялы мәҡәл тыңлаусының ҡулына «Һәнәк бирәм тип, көрәк тоттора» йәки «майға ымһындырып, бал ҡаптыра». Бында шундай типтағы мәҡәлдәргә бер нисә миҫал килтерәйек: «Ҡайғы юҡтан ҡайғы булды ҡәйнәмдең ҡара ҡайғыһы», «Бысраҡ эште ташланыҡ, дегет һата башланыҡ», «Ашау-эсеү байҙарса, өҫтә кейем йоҡараҡ» һ. б.

Мәҡәлдәрҙә һирәкләп булһа ла сарказм (әсе көләү, мыҫҡыллау) күренештәрен дә осратырға мөмкин. Бындай осраҡта мәҡәл теге йәки был күренештең шыҡһыҙ яғын ҡупайтып күрһәтеү аша маҡсатҡа ирешә. Алынған ваҡиға (күренештең) мәғәнәһеҙ яғы сиктән тыш ҡабартыла һәм шул үҙе тыңлаусыны тейешле һығымтаға, йәғни мәғәнәле фекергә килтерә. Мәҫәлән, «Эт саба тип, бет саба», «Ауыртҡан башҡа тимер тараҡ», «Таҙ ҙа тараҡлы булды, ул да яраҡлы булды» һ. б.

Әйтемдәр тураһында

Инде килеп, мәҡәлдәрҙең композицияһына ҡарата, әйтелмәй ҡалған ҡайһы бер күҙәтеүҙәргә ҡайтайыҡ. Үрҙә мәҡәлдәрҙең нигеҙҙә ике бер тиң киҫәктән ойошоуы тураһында әйтелде һәм был тиң киҫәктәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте, аралашыу принциптәре (синтаксик параллелизм) ҡаралды. Ләкин мәҡәл репертуарының бөтә байлығын алып ҡараһаҡ, ҡатмарлыраҡ күренештәргә лә осраясаҡбыҙ. Эш шунда: башҡорт халыҡ мәҡәлдәренең состав өлөшө булып килгән тиң киҫәктәрҙең һаны икенән артып киткән осраҡтар ҙа йыш ҡына күренә. Өс, дүрт һәм хатта күберәк бер тиң киҫәктәрҙән ойошҡан,

шиғри строфа хәленә килгән, мәҡәлдәрҙе осратырға мөмкин. Мәҫәлән, өс бер тиң киҫәктән торған мәҡәл:

Сәсәндең һүҙе уртаҡ,
Сибәрҙең йөҙө уртаҡ,
Оҫтаның ҡулы уртаҡ.

Ойошоу яғынан тағы ла күберәк баҫҡыслы, ҡатмарлыраҡ, дүртәр-бишәр тиң киҫәктән торған мәҡәлдәр ҙә күренә. Мәҫәлән:

Ябыҡ малдың ҡото булмаҫ,
Быҫҡыу усаҡтың уты булмаҫ,
Яман әҙәмдең аты (исеме, даны) булмаҫ,
Һорағандың ояты булмаҫ,
Ҡотһоҙ илдең заты булмаҫ.

Был осраҡта биш бер тиң киҫәк бергә уҡмашҡан хәлдә бер бөтөн булып күҙ алдына баҫа. Икенсе төрлө әйткәндә, бер-береһенә бик тә оҡшаған биш юлдан торған шиғыр строфаһы килеп сыға. Был юлдарҙың һәр береһе үҙаллы мәҡәл сифатында ла йөрөп ята.

Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: бындай бер тиң киҫәктәрҙең тағы ла ишәйеү тенденцияһы бар. Йәғни бер мәғәнә тирәһендә бер үк художестволы алым менән (ғәҙәттә, антитеза йәки параллелизм) бик күп һанда оҡшаш бер тиң киҫәктәр ойошорға мөмкин. Был хәл инде мәҡәлде күләмләндерә, ҡатмарлыраҡ күренешкә әйләндерә. Мәҡәл үҙенең тәбиғи төҫөн (мәҡәллеген) юғалта башлай һәм ҙурыраҡ, киңерәк жанр өсөн, иркенләберәк башҡарыла торған ижад төрө өсөн хас булған күренештәрҙе эсенә ала башлай. Был осраҡта һан үҫеше сифат үҙгәрешенә килтерә, ошо нигеҙҙә башҡа бер ижад төрө барлыҡҡа килә.

Бындай ижад төрөн элегерәк э й т е м тип тә, т у л ғ а у тип тә йөрөткәндәр. Шул рәүешсә, күп һандағы бер тиң киҫәктәрҙең (мәҡәлдәрҙең) тупланып, шиғри строфа булып ойошоуы нигеҙендә әйтем (тулғау) тигән күренеш барлыҡҡа килә. Был осраҡта «әйтем» тигән төшөнсәнең беҙҙә һуңғы йылдарҙа ҡабул ителгән мәғәнәлә түгел (поговорка мәғәнәһендә түгел), бәлки бөтөнләй икенсе төрлө функция башҡара торған жанр мәғәнәһендә ҡулланылғанын күрәбеҙ. Әлбиттә, быға бер ҙә ғәжәпләнергә ярамай. Айырым шарттар эсендә айырым һүҙҙәрҙең төшөнсәһе үҙгәрергә, киңәйергә йәки тарайырға мөмкин һәм бындай хәл тормошта йыш ҡына осрай.

Юғарыла күренеүенсә, әйтем тигән төшөнсәне электән гел мәҡәлдәрҙән генә теҙелеп ойошҡан тулы бер строфаға, йәғни кешегә өгөт-нәсихәт биреү рәүешендә махсус башҡарыла торған ижад төрөнә ҡарата ҡулланып йөрөткәндәр. Бының шауҡымын әле лә осратып була. Ауылдарҙа ҡарттар араһында берәй ғибрәтле ваҡиғаға ҡарата «әйтем, һөйләү», йә бул-

маһа өгөт-нәсихәт биреү, яҡшы кәңәш биреү йөҙөнән ниндәй ҙә булһа «әйтем әйтеп алыу» ғәҙәте әле лә йәшәп килә. Фольклор ижадсылары менән эш иткәндә: «Йә әле, берәй әйтем әйтеп ебәр» йәки: «Булмаһа, берәй әйтем әйтеп бирәйем» тигән һүҙҙәрҙе йыш ҡына ишетергә тура килә. Был, әлбиттә, осраҡлы нәмә түгел. Был хәл әйтемдең ҡатмарлыраҡ жанр булыуын һәм күберәк махсус һүҙ оҫталары сәсәндәр репертуарында йөрөүен аңлата.

Шуны ла әйтергә кәрәк: әйтемдәрҙең был сифаты мәҡәлдәрҙең үҙендә үк күрһәтелә. «Мәҡәл — һүҙ аҫҡысы, әйтем — күңел аҫҡысы» йәки: «Мәҡәл әйттем — юл өйрәттем, әйтем әйттем — күңел йыуаттым» тигәндәр боронғолар. Был миҫалдарҙа мәҡәл менән әйтемдең функцияһы асыҡлана һәм әлеге әйтем жанрының «һүҙ аҫҡысы» булыуҙан бигерәк, «күңел аҫҡысы» булыуы, кешенең күңеленә аҙыҡ була торған махсус мәғәнәле һәм йәтешле ижад төрө икәне күренә.

Бындай ижад төрө төрки теләндә һөйләшеүсе башҡа туғандаш халыҡтар ижадында ла (ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ, алтай, ҡарағалпаҡ) күренә. Төрлө урында ул төрлөсә атама алған. Боронғораҡ дәүерҙәрҙә төрки халыҡтары араһында бындай ижад төрө т у л ғ а у тигән атама алғанлығы билдәле. Ҡаҙаҡ (һәм ҡырғыҙ) халыҡ ижады ерлегендә, бигерәк тә халыҡ аҡындары эшмәкәрлегендә тулғау традицияһы һуңғы йылдарға тиклем йәшәп килә. Күбеһенсә, тулғау мәғәнәле шиғыр әйтеү, афористик йүнәлештәге шиғыр юлдарын (шиғри мәҡәлдәрҙе) бер-береһенә тулғап (үрелдереп) әйтеү, тигән мәғәнәлә ҡулланыла. Тулғау ҡаҙаҡ халыҡ ижадында, шулай итеп, фәлсәфи-дидактик йүнәлештәге теҙмә ижад төрө, күпселектә аҡындар эшмәкәрлегендә йәшәй торған мәғәнәле поэтик әҫәр.

Боронғо замандарҙа тулғау тигән атама башҡорт халыҡ ижады ерлегендә лә йөрөгән булыуына ишара бар. Бының әҙен халыҡ ижадының үҙенән табып була. Халыҡ батырҙарына арналған ҡобайырҙарҙың береһендә, мәҫәлән, ошондай юлдар осрай:

Батыр тигән заты бар,
Түлгән тигән аты (исеме) бар,
Тулғау тулғар дәрте бар.

Эш бында, әлбиттә, берҙәй һуҙынҡы өндәрҙең (т өнөнөң) гармониялы ҡушылып яңғырауында (аллитерация) ғына түгел. Ҡобайырсыға Түлгән батырҙың сәсәнлек оҫталығын билдәләп үтеү кәрәк. Уның сәсәнлек оҫталығы, күренеүенсә, «тулғау тулғарҙай» дәрәжәгә күтәрелгән. Тимәк, ул батыр ҙа, сәсән дә булған. Халыҡ эпосында урын алған батырҙарҙың йыш ҡына ҡеүәтле лә, зирәк тә итеп кәүҙәләнгәнен иҫкә алһаҡ, күп кенә осраҡта беләк көсөн һынашыу бәйгеһендә лә, аҡыл көсө һынашыу бәйгеһендә лә еңеп сығыуын хәтергә төшөрһәк, Түлгән батырҙы ғәйрәтле итеп күрһәтеү өҫтөнә

Тулғау әйтеүсе йәғни һүҙ ярышында еңеүсе итеп һүрәтләү ғәжәп түгел. Беҙҙе был аҡыл ярышының тулғау әйтеү формаһында барыуы айырыуса ҡыҙыҡһындыра. Тулғауҙы әйтеү ҙә түгел әле тулғауҙы тулғау (ҡылым) була. Йәғни был жанрҙы мәғәнәле һүҙҙәрҙе бер-береһенә тулғап, үрелдереп әйткәндәр булып сыға. («Тулғау тулғар дәрте бар» тиелгән). Ошондай уҡ күренештең халҡыбыҙ тормошонда урын алған булыуына ҡайһы бер шәжәрәләрҙә лә ишара бар. Тимәк, тулғау традицияһы күптән булған, ләкин атамаһы беҙгә килеп етмәгән йылдар төпкөлөндә тороп ҡалған. Бындай хәлдәр халыҡ ижады тарихендә булғылай ул. (Мәҫәлән, башҡорт халыҡ ижадында борон һарнау тигән ижад төрө булғанлығы тураһында юғарыла әйтелде).

Тулғау традицияһын артабан әйтем жанры алып киткән тип әйтергә тура килә. Эш, әлбиттә, был осраҡта жанрҙың атамаһына ғына ҡайтып ҡала, буғай. Боронғо тулғау ҙа, бөгөнгө әйтем дә бер үк формала йәшәгәндәр һәм бер үк функцияны атҡарғандар. Бәлки, әйтем атамаһы ла тулғау атамаһы менән йәнәшә боронғо осорҙа уҡ барлыҡҡа килгәндер.

Үрҙә килтерелгән поэтик миҫалды ҡобайыр жанрына ла яҡынайтып була. Бындай әйтемдәр (тулғауҙар), юғарыла әйтелгәнсә, шиғырға яҡын торалар һәм йыш ҡына уларҙа нигеҙ итеп ҡобайыр үлсәүе алына. Был хәл үҙе үк уларҙы ҡобайыр тип атарға урын ҡалдыра. Ләкин бында асыҡлыҡ индереү кәрәк. Ҡобайыр — илде маҡтау, батырҙарҙы данлауға арналған эпик жанр. Әйтем (тулғау), күренеүенсә, күберәк тормошҡа фәлсәфи баһа бирә торған, ҡылыҡ нормалары әйрәтә торған лирик дидактик жанр була. Был, әлбиттә, ҡобайыр менән әйтем (тулғау) араһында бәйләнеш юҡ тигән һүҙ түгел. Киреһенсә, әйтемдәр (тулғауҙар) күп ваҡытта теге йәки был ҡобайырҙың состав өлөшө булып килә, ҡобайырҙы башлау һүҙе йәки йомғаҡлау һүҙе рәүешендә ҡулланыла. Ҡайһы бер осраҡта теге йәки был ҡобайырҙың айырым бүлектәрен мәғәнә яғынан тоташтырыу, теге йәки был ваҡиғаға, батырҙарҙың эшенә йомғаҡ яһап, баһа биреү функцияһын үтәй. (Шуның өсөн хатта бындай өҙөктәрҙең үҙен дә ҡобайыр тип атау урын алған). Ләкин ғәмәлдә әйтемдәр (тулғауҙар) үҙаллы ижад төрө булып формалашҡандар һәм үҙаллы йәшәйҙәр.

Билдәле булыуынса, һәр бер ижад төрө бер-береһенә ныҡ бәйләнгән һәм бер-береһенә ярҙам итеп, тулыландырып үҫә. Әйтәйек, мәҡәлдәр ҙә күп ваҡыт әкиәт эсендә йәшәйҙәр. Оҫта әкиәтселәр үҙҙәренең репертуарын мәҡәл менән башлап ебәреүсән булалар, һөйләү барышында ла киң ҡулланалар һәм мәҡәл менән тамамлап ҡуялар. Әкиәт янында йәшәгән һәм әкиәт аша килеп ингән мәҡәлдәрҙе күп осратырға мөмкин. Был хәлде, юғарыла күрһәтелгәнсә, әйтемдәр (тулғау) яҙмышында ла күреп була.

Инде хәҙер әйтем (тулғау) жанрын тулы күҙ алдына килтереү өсөн тағы бер миҫал алайыҡ:

Ваҡ һибелгән йондоҙҙан
Балҡып торған ай артыҡ.
Буш һимергән айғырҙан
Ярһып торған тай артыҡ.
Дөйә һуйған йыйындан
Тәкә һуйған туй артыҡ.
Тауыш тыуған туйындан
Тыныс торған өй артыҡ.
Ғүмерең үтһә әрәмгә,
Йоҡола күргән төш артыҡ.
Ырыҫы булған әҙәмгә
Хәйерһеҙ йәйҙән ҡыш артыҡ.

Был — үҙаллы йәшәй торған тулы әйтем (тулғау) була. Әлбиттә, уны ҡобайырсы теге йәки был ҡобайырҙың состав өлөшө рәүешендә лә файҙалана ала. Уның шулай булыуында шик тә юҡ. Сөнки был строфа йә бер аҙ үҙгәртелгән хәлдә, йә ошо килеш ҡобайырҙарҙа йыш осрай. Быны дөрөҫләү өсөн батырҙар тураһындағы эпик әҫәрҙәрҙең береһе булған. «Алпамыша менән Барсынһылыу»ҙа килтерелгән батырлыҡ тураһындағы әйтемде күрһәтеү ҙә етә. Эпоста килтерелгән ул әйтем (тулғау) шулай уҡ үҙаллы әҫәр булып та йәшәй.

Юғарыла миҫал килтерелгән строфа, шул рәүешсә, тулы бер әҫәр булып күҙ алдына килә. Ләкин уның айырым үҙаллы киҫәктәрҙән ойошҡан булыуы ныҡ күҙгә бәрелә. Күренеүенсә, ул — эстәлеге яғынан бер-береһенә яҡын һәм оҡшаш булған айырым мәҡәлдәрҙең бергә ойошоуы нигеҙендә формалашҡан әҫәр. Уның һәр бер юлы афористик әйтелмәләр, мәҡәлдәрҙән тора. Ул мәҡәлдәр хатта айырым көйөнсә лә ҡулланып йөрөтөлә. Ләкин бергә тупланған хәлдә улар идея һәм художество берҙәмлеге тәшкил итеп гармониялы юнәлеш алалар һәм яңы сифат, яңы ижад төрө барлыҡҡа килтерәләр. Шул рәүешсә, әйтем (тулғау) афористик ижадтың ҡатмарлыраҡ төрө булып ҡала һәм мәҡәлдәргә ҡарағанда юғарыраҡ баҫҡысҡа баҫа.

Ә инде әйтем һүҙен рус фольклорындағы поговорка мәғәнәһендә ҡулланыу мәсьәләһенә килгәндә, быны беҙҙең башҡорт фольклористикаһына һуңғы йылдарҙа килеп ингән күренеш тип аңларға кәрәк. Күрәһең, башҡорт халыҡ ижадына яҡын торған туғандаш татар халыҡ ижады аша, дөрөҫөрәге, татар фольклорын өйрәнеүселәрҙең эшмәкәрлеге аша, улар ҡулланған терминде механик рәүештә башҡорт халыҡ ижады ерлегенә күсереү арҡаһында урынлашып киткән булһа кәрәк. Башҡорт халыҡ ижадында поговорка төшөнсәһен электән *тапҡыр һүҙ* тип йөрөтә торған булғандар.

Әгәр ҙә башҡорт халҡының афористик ижадындағы үҫеү процесен, ундағы ижад төрҙәренең үҙ-ара бәйләнеш һәм формалашыу процесен ябай схемаға күсереп булһа, ул хәрәкәтте

түбәндәгесә күрһәтеп булыр ине: был ижад төрө тапҡыр һүҙҙән — мәҡәлгә, мәҡәлдән — әйтемгә (тулғауға) табан үҫә.

Мәҡәлдәрҙең башҡа жанрҙарға мөнәсәбәте, афористик ижад төрө булараҡ, мәҡәлдәр халыҡ ижадының башҡа төрҙәре менән бик тығыҙ бәйләнгән. Был яҡлап ул айырыуса урында тора — мәҡәл үтеп инмәгән ижад төрө юҡ тип әйтерлек. Күп осраҡта мәҡәл башҡа жанрҙа барлыҡҡа килгән теге йәки был әҫәрҙең состав өлөшө булып килә.

Үрҙә мәҡәлдәрҙең ҡобайырға мөнәсәбәте асыҡ миҫалдарҙа күрһәтелде. Бергә ойошоп, әйтемгә (тулғау) үрелеп, ҡобайырҙың состав өлөшө булып килеүнә ирешеүҙән тыш, мәҡәлдәр халыҡ эпосының һәр мөйөшөндә тиерлек урын алған. Ләкин мәҡәл тыныс ҡына боҫоп ятмай, сюжет үҫешенең көсөргәнешле ерендә ҡалҡып сыға ла, үҙен күрһәтеп ала. Иртәктәрҙә, мәҫәлән, ил батыры алдына ҡуйылған бурыстарҙы, ил яҙмышына бәйле мөһим мәсьәләләрҙе хәл иткәндә, ил образы булып, халыҡ кәңәше булып яңғырай. Ғәҙәттә ул иртәктәрҙә үҙәк персонаждарҙың береһе булып урын алған ил ҡарты аҡһаҡал (Һабрау, Тарауыл һ. б.) тарафынан бирелгән мәғәнәле кәңәш формаһында әйтелә. Ил батырына, йәки ил башында тороусы шәхескә аҡыл бирә торған, дөрөҫ юл күрһәтә торған кодекс, әхләҡ һәм йәшәү нормаһы вазифаһын атҡара.

Әкиәт сюжеттәрендә лә мәҡәл шундай уҡ функция алып бара. Оҫта әкиәтселәр әкиәт батырының һәр бер хәрәкәтен, юлын мәҡәл менән оҙатып барыусан булалар. Бына миҫал өсөн бер генә өҙөк алып ҡарайыҡ:

«— Илсегә үлем юҡ, ханым-солтаным, — тип әйтте ти ҡарт.

Хан әйтте ти:

— Ҡырҡылған баш һаналмай. Йомошоңдо әйт тиҙерәк.

Ҡарт яуап бирҙе ти:

— Ашығып ҡуян ҡыуалар, ултырып аҡыл йыялар, ханым-солтаным».

Әкиәт персонаждарының һөйләшеүе, күренеүенсә, ғәҙәти түгел. Ике һүҙҙең берендә улар мәҡәл ҡуллана һәм эңгәмә, һүҙ барышында килтерелгән мәҡәлдәр һәр береһе сюжет үҫешенә ярашлы рәүештә эске мәғәнә менән әйтеләләр.

Сюжетле әҫәрҙәрҙә мәҡәлдәр бигерәк тә мәғәнәле, йәки көлкөлө ситуацияларҙы тасуир иткәндә йыш ҡулланыла. Юмор, сатрна, ирония характерендә ҡоролған мәҡәлдәрҙең юмористик әкиәттәрҙә, көләмәстәрҙә йыш ҡулланылыуы осраҡлы күренеш түгел. Һөйләүселәр быбың менән әкиәт йәки көләмәс сюжетенең көлкөлө яңғырашын көсәйтеүгә ирешәләр. Был йәһәттән бигерәк тә Алдар, Шомбай, Ерәнсә сәсән көләмәстәре исеме аҫтында таралған сюжет циклдары иғтибарға лайыҡ.

Тапҡыр һәм үткер һүҙле әкиәт йәки көләмәс персонажының мәҡәл менән оҫта эш итеүе һәм кәрәк урында ғына ҡул-

ланып, сюжет ағышына махсус юнәлеш биреүенән тыш, ҡайһы бер көләмәстәрҙең сюжетендә мәҡәл формаһының ниндәй ситуацияла килеп сығыуы күрһәтелә. Был хәл үҙе үк юмористик юнәлештәге мәвәлдәрҙең көләмәс ерлегендә барлыҡҡа килеүен һәм көләмәс ярҙамында йәшәүен дауам итеүе тураһында һөйләй. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, ҡайһы бер үҙенсәлеклерәк мәҡәлдәр артынан эйәреп махсус көләмәс сюжеттәре йөрөп ята.

Теге йәки был ижад төрөнөң бер-береһенә ялғанып йәшәүе тәбиғи күренеш. Мәҫәлән, йыр мираҫының бер өлөшө төрлө легендалар менән уратып алынған. Күп кенә сюжетле йырҙарҙың килеп сығыуын аңлатыуға ҡоролған легендалар, риүәйәттәр яҙып алынған. Был, әлбиттә, йыр жанры үҙе легенданан килеп сыҡҡан, йәғни легенданан алынған тигән һүҙ түгел. Йыр ҙа, уны оҙатып килгән легенда ла ижтимағи тормош сағылышы булып тора. Быны фольклорҙа урын алған ижади уртаҡлыҡтың, бер жанрҙың икенсе жанр менән бергә үрелеп үҫеүе кеүек үҙенсәлекле күренеш тип баһаларға кәрәк.

Мәҡәл менән көләмәс араһындағы бәйләнеште тикшергәндә лә тап бына ошо принциптән сығып яҡын килергә кәрәк. Көләмәс тә, мәҡәл дә һәр ҡайһыһы тормошто үҙенсә сағылдыра торған ижад төрҙәре сифатында күҙ алдына баҫалар. Шул уҡ ваҡытта теге йәки был мәҡәлдең килеп сығыуын һөйләп биргән көләмәс сюжеттәре күп кенә. Был осраҡта бер ижад төрөндә сағылыш тапҡан күренеште, икенсе ижад төрө менән дә кәүҙәләндереп ҡарау, (аңлатырға тырышыу) кеүек бик үҙенсәлекле ижад бәйләнеше хасил була. Халыҡ ижады өсөн быңдай күренеш тәбиғи.

Бына, мәҫәлән, халыҡ телендә: «Еңгән — еңелгәндең елкәһенә менгән» тигән мәҡәл бар. Тормош тәжрибәһе булараҡ барлыҡҡа килгән был мәҡәл башҡалар кеүек кәрәк ваҡытта фекер ағышын ҡеүәтләп ебәрә торған, теге йәки был күренешкә фәлсәфи ҡараш ташлап ҡуя торған һүҙ ҡоралы булып хеҙмәт итә. Ошо мәҡәлдең килеп сығыуын аңлатҡан көләмәс сюжете лә бар. Ул былай төҙөлгән:

Алдар шайтан менән алыша. Һәр ваҡыт еңеп сыға. Бер саҡ улар алыҫ юлға юнәләләр, күп ер үтәләр, арыйҙар. Алдар әйтә: «Әйҙә алышабыҙ, кем еңә — шул еңелгәндең елкәһенә менеп ултырыр», — ти. Шайтан әйтә: «Кем олораҡ — шул еңә». Алдар һорай: «Һин нисә йәштә?» Шайтан ҡупайып яуап бирә: «Мин тыуғанда, ер ҡалаҡтай ғына, күк табаҡтай ғына ине», — ти. Шул саҡ Алдар илап ебәрә: «Тап шул йылды минең кесе улым үлеп ҡуйҙы бит. Шуны йәлләп илайым», — ти. Шулай итеп, шайтан еңелә. Алдар шайтандың елкәһенә менеп ултыра һәм һөйләүсе һығымта сығарып ҡуя: «Еңгән — еңелгәндең елкәһенә менгән» тигән мәҡәл бына шунан ҡалған, имеш...

Был осраҡта мәҡәлдең килеп сығыуына ишара яһала.

Йәғни тормоштан алынған мәғәнәле (образлы) фекерҙе тарқатып һүтеп ҡарау һымаҡ, йәғни яңынан бер сюжет эсенә ҡуйып ҡарау һымаҡ бер үҙенсәлекле күренеш килеп сыға. Был үҙе үк иғтибарҙы ылыҡтырырлыҡ нәмә.

Шул уҡ ваҡытта кәләмәстәрҙең үҙенән алынған, йәғни сюжет үҫешенең кульминацияһы рәүешендә барлыҡҡа килгән афоризмдәрҙең мәҡәл сифатында таралып китеүен күрһәткән миҫалдар ҙа бар.

Шундай бер кәләмәс сюжетенә күҙ ташлап алайыҡ.

Аңғырараҡ бер бәндә далала ер тирмәненә тап була ла аптырай: «Тирмәне тирмән икән дә һыуы булмағас, ташы нисек әйләнә икән?» — тип уйлай. «Ташты ел әйләндерә», — тип быға аңлатып бирәләр. Был бәндә аңлаған кеше булып башын ҡаға ла, әйтә: «Ә, белдем, ел тирмәне икән, һыуы ҡайҙан килә икән?»

Ошо: «Белдем, ел тирмәне икән, һыуы ҡайҙан килә икән?» тигән һөйләмде аңғыралыҡтан көләүгә арналған ситуацияларҙа бик йыш файҙаланалар. Ҡарап тороуға ул мәҡәл булып ойошоп етмәгән дә кеүек. Ләкин мәҡәл функцияһын ул бик тотороҡло башҡара, йәғни күсерелгән мәғәнәлә йыш ҡулланыла. Килә-килә уның тағы ла шымарыу мөмкинлеге бар.

Йәки бына тағы «Һауыр инем һыйырҙы, аҙбар түбәһе һаламлы (йәки аҙбарығыҙ ҡыйшайған)», «Урыр инем ураҡты, баҫыуығыҙ ҡыуаҡлы», «Сабыр инем бесәнде, болоноғоҙ себенле» тигән мәҡәлдәрҙең артында шулай уҡ мәрәкәле сюжет тора. Уларҙың ниндәй ҙә булһа көлкөлө ваҡиға һөҙөмтәһе сифатында барлыҡҡа килеүенә ишара яһала. Әйтәйек, бер ялҡау килен һыйыр һауырға сыҡҡан еренән онотолоп аҙбарға ҡарап тора икән. Ул арала көтөү китеп тә барған. «Ни эшләп һауманың?» тигән һорауға килен: «Һауыр инем һыйырҙы, аҙбар түбәһе һаламлы (йәки аҙбарығыҙ ҡыйшайған)» тип яуап биргән, ти. Бына ошо булдыҡһыҙ килендең, килешһеҙ яуабы рәүешендә барлыҡҡа килгән һөйләм күсерелгән мәғәнәлә ҡулланыла биреп ҡанатлы тапҡыр һүҙгә әйләнеп киткән һәм эшкинмәгән ялҡауҙарҙан көлә торған мәҡәл рәүешендә ҡалҡып сыҡҡан. Шуға оҡшаш «урыр инем ураҡты...», «сабыр инем бесәнде...» тигән һөйләмдәр ҙә үҙенең булдыҡһыҙлығына килешмәгән сәбәп эҙләп йөрөүсе ялҡауҙарҙан көлөргә, кәрәк булған осраҡта ҡулланыла торған үткер мәҡәл сифатында күҙ алдына баҫалар.

Мәҡәлдәрҙең йыр репертуарына килеп инеү күренештәре лә бар. Бындай осраҡта мәҡәл йыр туҡымаһына үрелеп китә, йырҙа бирелгән образды мәғәнәле көсәйтергә ярҙам итә.

Ә инде мәҡәл менән йомаҡ араһындағы бәйләнеш икеһе бер оянан сыҡҡан, бер ғаиләлә үҫкән игеҙәктәр араһындағы мөнәсәбәт кеүек яҡын. Был ике жанр тормошта икеһе ике функция алып барған булһалар ҙа, афористик ижад ерлегендә барлыҡҡа килеүҙәре менән бер-береһенә бик оҡшаш яҡтары

күп. Йомаҡтарҙың композицияһы, ҡоролошо һәм художество үҙенсәлектәре мәҡәлдәрҙекенә тап килә һәм, киреһенсә, мәҡәлдәрҙең поэтикаһында күҙгә бәрелгән элементтәрҙең бөтәһен дә йомаҡ поэтикаһында ла табырға мөмкин.

Был ике жанр араһындағы оҡшашлыҡ һәм яҡынлыҡ хатта шуға барып еткән ки, ҡайһы бер осраҡта бер үк һүҙ материалы (строфа) йомаҡ булып та йөрөп ята, мәҡәл сифатында ла ҡулланыла. Мәҫәлән: «Ер аҫтынан ең сыҡты, иңе буйы тиң сыҡты» тигән йомаҡ бар. Уның йәбешкәге (табылдығы) — кишер, ҡайһы бер төбәктәрҙә һарна булып килә. Ике бер тиң һөйләмдең ойошоуы тәртибендә барлыҡҡа килгән ошо уҡ һөйләмде беҙ мәҡәл сифатында ла осратабыҙ. Йәки: «Баҡыр башлы йылан күҙе ҡояш байығас асыла» тигән йомаҡ (яуабы — шәм, лампа) бар. Шул уҡ һөйләм мәҡәл репертуарында ла йөрөп ята. Был осраҡта ул аҫтыртын эш итеүсе, йәшерен, шикле эш менән шөғөлләнеүсе шәхестәрҙе фашлау хеҙмәтен үтәй. Бына тағы кеше ғүмере тураһындағы бер йомаҡты алайыҡ:

Бер юл бар — алыҫ,
Алыҫта булһа — «яҡын».
Бер юл бар — яҡын,
Яҡында булһа — «алыҫ».

Ошо уҡ строфа үҙгәрмәй-нитмәй мәҡәл булып та йөрөй. Мәҡәлдә лә шул уҡ тормош юлы ҡатмарлы булыуына ишара яһала, фәлсәфи мәғәнә менән тулған һығымта булып яңғырай. Бындай миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин.

Үрҙә әйтелгән фекерҙәр бөтәһе лә мәҡәл жанрының тормошсан һәм хәрәкәтсән ижад төрө икәнен күрһәтәләр.

ӘҘӘБИӘТ

Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре. (Төҙөүсеһе һәм редакторы Кирәй Мәргән). Өфө, 1960.

Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр. (Төҙөүсеһе Ф. Надршина). Өфө, 1980.

Йомаҡтар

Ниндәй ҙә булһа предметтең йәки күренештең үҙенә генә характерле булған сифаттарын образлы итеп икенсе предметкә йәки күренешкә күсереп, йәғни йомоп әйтеү йомаҡ тип атала.

Ысынлап та, йомаҡ ул ниндәй ҙә булһа бер нәмәне (предметте йәки күренеште) күсерелгән мәғәнәлә бирелгән һорау һәм шул һорауҙың яуабы формаһында әйтеп күрһәтеү ҙән тора. Йәғни йәшерелгән (йомолған) формала һорау ҡуйыла һәм шуға яуап булып предмет йәки күренеш үҙе килә.

Ошо хәлгә бәйле рәүештә йомаҡтарҙың яуабы өсөн дә төрлө ерҙә төрлөсә махсус атамалар урынлашҡан. Күп кенә урында уны табылдыҡ, йомолдоҡ, йәбешкәк тип йөрөтәләр.

Башҡорт халҡының һүҙ оҫталары араһында «йомаҡ ҡойҙом — ҡас, йомолдоғон ас» тигән һүҙҙе йыш ҡына ишетергә мөмкин. Был урында ана шул «йомолған» һорауҙың яуабы урынына «йомолдоҡ» тигән атама ҡулланылыуын күреү ауыр түгел.

Йомаҡ жанры, шулай итеп, төҙөлөшө яғынан да, йәшәү формаһы яғынан да үҙенсәлекле ижад төрҙәренең береһе. Был үҙенсәлекте, шулай уҡ йомаҡтарҙың барлыҡҡа килеү һәм формалашыу тарихенә күҙ һалғанда ла һәм шулай уҡ үҫеш процесендә ижтимағи тормошта тотҡан урынын һәм функцияһын билдәләгәндә лә, асыҡ күрергә мөмкин.

Йомаҡ кешеләрҙең ижтимағи тормошонда йомоп, йәғни йәшереп, һөйләшеү кәрәклеге нигеҙендә, йәшерен тел, йәғни шартлы һөйләшеү теле кәрәклеге нигеҙендә, барлыҡҡа килә. Был «йәшерен тел», әлбиттә, башта боронғо ышаныуҙарға, боронғо магия менән бәйле йолаларға эйәреп тыуа. Килә-килә быңдай «серле тел»дең тормоштағы ижтимағи функцияһы үҙгәрә һәм киңәйә бара һәм был хәл үҙе үк йомаҡ жанрының әкренләп үҫә, камилләшә һәм тәрәҡҡиләшә барыуына алып килә.

Беҙгә инде боронғо ырыу-ҡәбиләләрҙең донъяға ҡарашы сикләнгән булыуы, тәбиғәт стихияһы алдында көсһөҙ булыуҙары арҡаһында уларҙың тәбиғәт эсендәге бөтә күренештәрҙе лә изгеләштереп, аллалаштырып ҡарауға өйрәнеп китеүҙәре билдәле. Һәр бер күренештең үҙ хужаһы бар тип фараз иткән боронғо кешеләр ана ошо «хужалар»ға, йәғни үҙ хыялдарында тыуған аллаларға табыныу, мөмкин тиклем уларҙың кәйефен табырға тырышыу (ҡорбан биреү . б.) менән генә сикләнеп ҡалмағандар, ваҡыты-ваҡыты менән уларҙан ҡасырға, уларҙы «алдарға» тырышҡандар. Бына шул юнәлештә шартлы исемдәр ҡулланыу, йәки улар тураһында күсерелгән, йәшерелгән төшөнсәләр менән генә эш итеү тенденцияһы урынлашып китә. Аң үҫешенең бик боронғо кимәлен сағылдырған бындай миҫалдар йомаҡ репертуарында, һирәк булһа ла, бөгөнгә тиклем һаҡланып киләләр. Мәҫәлән:

Шарт итте, шорт итте
Ҡаратауҙың ҡапҡаһы;
Ялт итте, йолт итте
Ҡар-урмандың арҡаһы.
Үтеп китте, күрмәнем,
Ни икәнен белмәнем.

Был осраҡта йомоп әйтелгән йәшен «хужаһының», йәғни күк аллаһының, рухын ҡуҙғатмаҫҡа тырышыу, нисек тә уны ситләтеберәк үтергә һәм, хатта, әгәр ҙә ул «һиҙеп ҡалһа» ла, күрмәмеш һәм белмәмеш булып ҡалырға һәм шуның менән ул «хужа»ның зарар килтермәүенә ирешергә ынтылыуҙың сағылышын күреү ауыр түгел.

Үҙҙәрен әйләндереп алған донъяны йәнләндереп, изгеләштереп ҡararға өйрәнгән боронғо кешеләр, һәр төрлө йәнлектәр һәм хайуандар донъяһын да бик үҙенсәлекле ҡабул иткәндәр. Уңышһыҙ һунарҙың сәбәбен улар «сер асылыу»ҙан күргәндәр һәм шуның өсөн боронғо һунарсылар үҙҙәренең ҡайҙа ни өсөн барырға тейеш икәнлектәрен йәшерергә тырышҡандар. Әгәр ҙә һунар объекты булған йәнлек, кейек йәки ҡоштоң исеме сыға ҡалһа, тимәк, юл уңышһыҙ була, сөнки алдан уҡ һиҙенергә юл асыла. Тимәк, маҡсатты ла, объектты ла йәшерергә кәрәк, тигән бурыс ҡуйыла. Быны инде әлеге «йәшерен» тел ярҙамында ғына атҡарып була. Тап ана шул нигеҙҙә ҡырҙағы йәнлек, урмандағы кейек, ҡош-ҡорт һәм һунар объекты булған башҡа бөтә хайуандар донъяһы халыҡ телендә йәшерелгән, йәғни күсерелгән исем ала башлай. Шул рәүешсә уларға башҡа предмет һәм күренештәр өсөн хас булған сифаттар тағыла һәм был эш халыҡтың образлы тел байлығы аша атҡарылғанлыҡтан, халыҡ күңелендә ятҡан оҡшатыу, сағыштырыу кеүек үҙенсәлекле сараларҙың ҡалҡып сығыуына һәм активләшеүегә алып килә. Мәҫәлән, башҡорт телендә айыуҙы үҙ исеме менән түгел, бәлки «домбай», «урман хужаһы» йәки «солоҡ эйәһе» тип, бүрене «йылтанкүҙ» тип, төлкөнө «көлтәгойроҡ» тип, ҡуянды «шешҡолаҡ» йәки «сонторғойроҡ» тип атау ғәҙәтен ана шул дәүерҙән үк ҡалған тип аңларға кәрәк һәм тап быны ошо һүҙҙәр заманында «йәшерен тел» хеҙмәтен, йәғни күсерелгән, төрөлгән тел хеҙмәтен үтәп килгәндәр. Был атамаларҙың халыҡ ижадында (әкиәттәрҙә, эпоста) әле лә урын алып килеүе уларҙың тотороҡло һәм тормошло булыуын раҫлай. Ошо күсепелгән йәшерен атамаларҙың киңәйеүе нигеҙендә йомаҡтар барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, «башы — ураҡ, ҡойроғо — тараҡ» тибындағы йомаҡтарҙың генезисе тап бына ошо ерлеккә ҡайтып ҡала.

Боронғо ышаныуҙар ерлегендә тыуған «йәшерен тел»дең ижтимағи функцияһы килә-килә, әлбиттә, киңәйә һәм ныҡ үҙгәрә. Был «шартлы тел»де ырыу башлыҡтары үҙ мәнфәғәттәрендә файҙалана башлайҙар. Ырыуҙың эсендә йәки тышында булған теге йәки был мөһим хәлде община ағзаларынан (халыҡтан) йәшереү өсөн, халыҡҡа һиҙҙермәй генә эш йөрөтөү өсөн, файҙаланалар. «Йәшерен тел» ярҙамында ырыу-ара мөнәсәбәттәр билдәләнә, теге йәки был ырыуҙың хәрби һәләте, батырҙары (ғәскәре) тураһында мәғлүмәттәр алына. Ошо уҡ «шартлы тел» ярҙамында союздаштар араһында алда буласаҡ яу тәртибе тураһында һөйләшеү, аңлашыу алып барыла һәм ҡаршы тараф тураһында фекер йөрөтөү, кәңәш итеү эштәре атҡарыла. Шулай итеп, «йәшерен тел» хеҙмәтен үтәп килгән йомаҡ килә-килә «хәрби тел» функцияһын атҡарып алып китә, хатта хәрби пароль (оран, клич) хеҙмәтен үтәй башлай.

Йомаҡтарҙың ижтимағи функцияһы, әлбиттә, былар менән генә сикләнмәй. Әгәр ҙә шулай булһа, ошо юғарыла телгә алынған магия традициялары һүнеү менән, ижад төрө булыу яғынан йомаҡ жанры үҙе лә бөтөнләй юғалып ҡуйыр ине. Ләкин беҙ йомаҡ жанрының һаман эҙмә-эҙлекле үҫә барғанын күрәбеҙ. Был хәл инде ижад төрө буларaҡ йомаҡтың ижтимағи функцияһы яңы шарттарҙа тағы киңәйә төшөүен, халыҡ тормошонда уның тотҡан урыны һаман нығый барыуын күрһәтә торған күренеш.

Төҙөлөшө яғынан һорау һәм яуап формаһында ойошҡанлыҡтан, йомаҡ жанры бер үк ваҡытта кешеләрҙең тапҡырлығын, отҡорлоғон һынау һәм зирәклеген арттырыу сараһы булып та хеҙмәт итә. Уның был функцияһы килә-килә ныҡ өҫтөнлөк итә башлай. Һәм, тәүге функцияһы юғалыу менән, жанрҙы үҫтереүҙә берҙән-бер тотороҡло факторға әйләнә. Кешеләрҙе аҡылға өйрәтеү, зирәклек, тапҡырлыҡ тәрбиәләү кәрәклеге инде бер ваҡытта ла һүнмәй һәм йәшәү шарттары үҙгәргән һайын, ижтимағи шарттар ҡатмарлашҡан һайын, был талаптың кәрәклеге арта ғына бара. Шулай итеп, йомаҡ жанрының йәшәү сфераһы киңәйә һәм үҫеш мөмкинлектәре тағы арта бара.

Йомаҡтың тәрбиәүи сифаты халыҡ ижадында (әкиәттәрҙә, эпоста) киң сағылған. Ғәҙәттә, ил батырын ниндәй ҙә булһа ҡатмарлы йомаҡ әйтеп, һынап ҡарайҙар. Әгәр ҙә ул ошо һынауҙы яҡшы үтһә, уға ышаныс белдерәләр, ил батыры итеп һанайҙар, яуаплы эш тапшыралар. Бына эпик ҡомартҡыларҙа киң урын алған йәш быуында зирәклек, тапҡырлыҡ тәрбиәләү өсөн әйтелә торған йомаҡтарҙың береһенә күҙ ташлап үтәйек:

Тимер, ҡорос, булатты
Ҡамыр иткән бармы икән?
Оҙон, оҙон, оҙон юл,
Осона сыҡҡаң бармы икән?
Арҡауылдың утынан
Ат утлатҡан бармы икән?
Тибенгеһен тирләтеп,
Төндә юртҡан бармы икән?
Ҡонан ҡуйҙың ҡойроғон
Яңғыҙ ейгән бармы икән?
Иҙел менән Яйыҡтың
Билен быуған бармы икән?

Был ҡатмарлы, күп баҫҡыслы йомаҡтың йомолдоғо, йәғни яуабы ла үҙенсә шиғри алымдар менән башҡарыла:

Тимер менән булатты
Ҡамыр иткән — тимерсе,
Оҙон, оҙон, оҙон юл,
Осона сыҡҡан — һатыусы.
Арҡауылдың утынан
Ат утлатҡан — каруансы.

Тибенгеһен тирләтеп,
Төндә юртҡан — юлаусы.
Ҡонан ҡуйҙың ҡойроғон
Яңғыҙ ейгән — һунарсы.
Иҙел менән Яйыҡтың
Билен быуған — балыҡсы.

Йомаҡтарҙың тәрбиәүи ролен, кешелә зирәклек, тапҡырлыҡ, отҡорлоҡ уятыу көсөн ошо юғарыла килтерелгән өҙөк аша шаҡтай тулы күҙ алдына баҫтырып була. Шулай итеп, йомаҡ жанрының функцияһы киңәйә һәм үҫә. Ул ғәжәп үҙенсәлекле аҡыл һәм тапҡырлыҡ уйынына әйләнеп китә, кешелә образлы фекерләү һәм тапҡыр һүҙ күрәштереү күнекмәһе тәрбиәләй торған үҙенсәлекле аҡыл ярышының бер төрө формаһын ала. Йомаҡтарҙың был ижтимағи әһәмиәте бөгөнгө көндә лә кәмегәне юҡ, киреһенсә, арта һәм нығый бара. Йомаҡ жанры, шулай итеп, яңы шарттарҙа ла үҫешен дауам итә.

Йомаҡтарҙы төркөмләү. Йомаҡтарҙа фекер барышы күбеһенсә конкрет төшөнсәләр (предмет, күренеш) менән бәйләнгән. Конкрет предметтең (күренештең) сифатын икенсе предметкә (күренешкә) күсереү нигеҙендә тыуған образлылыҡ, юғарыла әйтелгәненсә, фекерләүҙең боронғо дәүерҙәре өсөн хас булған күренеш. Абстракт төшөнсәләрҙең сағыштырмаса кәм булыуы, ана шул рәүешсә, был жанрҙың боронғо ижад төрө икәнен тағы бер яҡлап раҫлай һәм асыҡлай.

Тәү ҡарауға был хәл үҙе үк йомаҡ жанрын төркөмләштереүҙе конкретләштерә һымаҡ һәм шуның менән, ғөмүмән, классификация яһауҙы еңелләштерә һымаҡ күренә. Ләкин был конкретлектең таралыу сфераһы бик киң икәнен оноторға ярамай. Ошо конкрет төшөнсәләр аша халыҡ үҙ әйләнәһендәге бөтә донъяны, бөтә йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт күренештәрен, кешеләрҙең хәрәкәтенә, йәшәү сфераһына һәм үҙ-ара мөнәсәбәттәренә бәйле булған бөтә күренештәрҙе образлы итеп күҙәләндерә. Был йәһәттән ҡарағанда, йомаҡтарҙы төркөмдәргә бүлеү мәсьәләһе шаҡтай ауыр һәм ҡатмарлы эш булып тора.

Тематик яҡтан йомаҡтарҙы өс эре төркөмгә бүлергә мөмкин:

1. Тәбиғәт күренештәре тураһындағы йомаҡтар. 2. Кеше һәм уның көнкүрешенә бәйле тыуған йомаҡтар. 3. Ижтимағи тормошто сағылдырған йомаҡтар.

Һәр бер классификация шартлы булған кеүек, был төркөмдәргә лә «шартлы ойошоу» тип ҡарарға кәрәк. Шуныһы мөһим: был классификация йомаҡ жанрының үҙенсәлеген, йәки уның конкретлеген, инҡар итмәү менән бергә, төркөмдәрҙе артыҡ ваҡлап, кәрәгенән тыш конкретләштереп ебәреүгә лә юл ҡуймай. Кешене уратып алған донъяның, тәбиғәттең һәр бер конкрет күренешенә ҡарата сығарылған йомаҡтар ошо эреләтелгән төркөмдәр эсендә үҙенә урын таба ала. Мәҫәлән, «Тәбиғәт күренештәре тураһындағы йомаҡтар» исеме аҫтында бирелгән беренсе төркөм эсендә «Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт» йәки «Үҫемлектәр донъяһы», «Хайуандар донъяһы», «Ҡоштар» һ. б. шундай бүлексәләр, ваҡ төркөмдәр аша тәбиғәттең төрлө һәм конкрет күренештәрен сағылдырған йомаҡтарҙы бер урынға, бер кәштәгә, туплап ҡарарға мөмкинлек тыуа.

Кеше һәм уның көнкүрешенә, хәрәкәтенә, хеҙмәтенә бәйле тыуған йомаҡтар аша беҙ бик боронғо дәүерҙәрҙән алып бөгөнгә көнгә тиклем килгән ижтимағи үҫештең сағылышын күрә алабыҙ. Был төркөмгә ингән (һәм уның эсендәге бүлексәләргә тупланған) йомаҡтар быуаттар эсендә тормош укладының үҙгәрә барыуы тураһында, кешеләрҙең аң үҫешен һәм донъяға ҡарашы киңәйә барыуы тураһынжа үҙенсәлекле хәбәр бирәләр. Баштараҡ был «йәшерен (шартлы) тел» боронғо һунарсылыҡ, малсылыҡ сфераһындағы предмет һәм күренештәргә бәйле тыуа һәм боронғо кешеләрҙең ошо юнәлештәге тәүге аҙымдарын, примитив хеҙмәтен сағылдыра. Кешеләрҙең хәрәкәт сфераһы киңәйеү менән тирә-яҡты «шартлы тел» аша кәүҙәләндереү сфераһы ла киңәйә; уның конкрет ерлеге, объекттары үҙгәрә һәм тулылана бара. Мәҫәлән, ҡырағай хайуандарҙы ҡулға эйәләштереү процесендә хайуандар тураһындағы циклға йорт хайуандары тураһындағы конкрет күҙәтеү һәм оҡшатыуҙарға нигеҙләнгән тормошсан йомаҡтар өҫтәлә. Ултыраҡ тормошҡа күскәндән һуң, тормош сфераһына культуралаштырылған үҫемлектәр тураһындағы төшөнсәләр килеп ингәндән һуң, шул үҫемлектәрҙең сифатын икенсе предметкә күсереп ҡарау, йәки башҡа берәй предметтең сифатын ошо культуралаштырылған үҫемлектәргә (игенгә) күсереп ҡарау мөмкинлеге тыуа һәм был йомаҡ жанрында тағы ла яңы төркөм асып ебәрә. Әлбиттә, «Иргә — ҡанат, солтанға — һанат, йәй арымай, ҡыш ҡарышмай»; йәки: «Тарта ла тарта, ул тартҡан һайын кешегә килер арта» (ат); «Баҡырыҡ та баҡырыҡ, баҡырыҡ тулы тыҡрыҡ» (һарыҡ); «Арҡыс-торҡос, дүрт терәүес, бер болғауыс, торна муйын, ҡыйыш баш» (дөйә) кеүек йомаҡтарҙың ерлеге йорт хайуандары барлыҡҡа килгәс тыуған күренештәргә, ижтимағи мөнәсәбәттәргә ҡайтып ҡала. Шулай уҡ: «Төбө тамыр, уртаһы һеңер, осо май» (тарма); «Ҡар аҫтында ҡышлаған, бүркен йәшел ҡышлаған» (ужым); «Уҡ, уҡ, уҡ кеүек, башы алтын суҡ кеүек» (бойҙай); «Ҡат-ҡат сепрәк, ятҡан ере тупраҡ» (кәбеҫтә) һһ. б. шундай типтағы йомаҡтарҙың ерлеге лә сағыштырмаса алыҫ түгел икәнен, игенселеккә нигеҙләнгән тормош укладының урынлашҡас барлыҡҡа килгәнен күреү ауыр түгел.

Шул рәүешсә, бик үҙенсәлекле «йомоҡ» жанр булыуға ҡарамаҫтан, ижтимағи үҫеш процесендәге күренештәрҙе йомаҡ жанры ла шаҡтай тойолорлоҡ сағылдыра. Килә-килә, жанр эсендә абстракт төшөнсәләр күбәйә башлағас, ижтимағи мөнәсәбәттәр йомаҡ жанрында киңерәк урын ала башлайҙар һәм уларҙа социаль тигеҙһеҙлеккә, иҙеүгә ҡаршы, хакимлек итеүсе синыф вәкилдәренә ҡаршы мотивтәр туранан-тура сағылыш таба. Хеҙмәтсән халыҡтың дошмандарына, байҙарға, феодалдарға, дин әһелдәренә, мулла-монтағайҙарға ҡаршы мотивтәр менән һуғарылған йомаҡтар репертуарҙа ҙур ғына урын алып торалар.

Ижтимағи үҫеш һәм тәрәҡҡиләшеү халыҡ тормошона яңынан-яңы күренештәр алып килә; ҡулланыуҙа элек булмаған предметтәр, әсбаптар галереяһы бер туҡтауһыҙ арта бара. Конкрет образлылыҡтың үҫеш мөмкинлеге, шул рәүешсә, әҙмә-әҙлекле киңәйә. Тағы яңы сағыштырыуҙар, оҡшатыуҙар, күсереүҙәр, яңы метафорик алымдар барлыҡҡа килә.

Үҙенең тәүге функцияһын, тәүге характерен юғалтҡан, быуаттар киңлегендә үҙгәрә, үҫә барған йомаҡ жанры активлеген, популярлеген юғалтмай. Яңы шарттарҙа яңы йүнәлеш алып тағы үҫеп китә.

Й о м а ҡ т а р ҙ ы ң х у д о ж е с т в о ү ҙ е н с ә л е к т ә р е. Йомаҡтарҙың генезисе, ерлеге һәм ижтимағи-эстетик функцияһы бөтә ерҙә лә бер булһа ла, фольклорҙың башҡа жанр һәм төрҙәре шикелле уларҙы ла конкрет милли ерлектә тыуған ижад емеше тип ҡарарға кәрәк. Был инде бигерәк тә йомаҡтарҙың тәбиғәте, художество үҙенсәлектәре, тел-стиль саралары тураһында фекер йөрөткәндә, иғтибар үҙәгендә торорға тейеш булған нәмә.

Әлбиттә, йомаҡтарҙың художество үҙенсәлеге уларҙың тәбиғәте, йүнәлеше, тормоштағы ижтимағи-эстетик функцияһы менән билдәләнә. Мәсьәләгә был йәһәттән яҡын килгәндә, бөтә төр йомаҡтарҙа ла дөйөмлөк, берҙәмлек, яҡынлыҡ булһа ла, уларҙы гел бер генә төрлө формала ойошҡан ижад төрө тип күҙ алдына килтерергә ярамай. Метафораға, йәғни бер предметтең (күренештең) сифатын икенсе нәмәгә күсереп тасуирләүгә ҡоролған аллегорик йомаҡтар була, туранан-тура һорау биреп яуап алыу (диалог) формаһында ҡоролған һорау-йомаҡтар була һәм, аҙаҡ килеп, иҫәп-хисапҡа, һанауға ҡоролған арифметик йомаҡтар осрай. Йомаҡтарҙың художество үҙенсәлеге, структураһы, бына ошо юғарыла телгә алынғанса, уларҙың тәбиғәте, йүнәлеше менән билдәләнә. Шул рәүешсә, ҡоролошо, художество үҙенсәлектәре яғынан йомаҡтарҙы шартлы рәүештә өс төркөмгә бүлергә мөмкин: 1) Метафорик (аллегорик) йомаҡтар, 2) һорау йомаҡтар, 3) Арифметик йомаҡтар.

Тупланған материалдың күпселек өлөшөн м е т а ф о р и к й о м а ҡ т а р тәшкил итә. Был, әлбиттә, тәбиғи. Ғөмүмән, йомаҡ жанрын, Аристотель әйткәнсә, «оҫта ойошторолған метафора» тип йөрөтәләр. Был үҙе үк метафорик алымдарҙың, сағыштырыу, оҡшатыу элементтәренең йомаҡтарҙа киң ҡулланылыуын алдан уҡ билдәләп торған фактор. Шуның өсөн был осраҡта ла һүҙҙе бына ошо метафорик йомаҡтар тураһында алып барырға тура килер.

Сағыштырыу, оҡшатыу саралары һәм алымдары, халыҡ ижадының башҡа жанрҙарындағы кеүек, йомаҡтарҙа ла күп төрлө. Ләкин йомаҡтарҙа был саралар (метафора, сағыштырыу, оҡшатыу) төп урынды алып торалар, һәм икенсе төрлө

әйткәндә, йомаҡты билдәләп, жанр кимәленә күтәреп, үҙаллы ижад төрө яһап киләләр.

Йомаҡтың үҙендә лә сағыштырыу саралары һәм алымдары бер генә төрлө түгел, әлбиттә. Хәбәр итеү формаһында бирелгән ябай сағыштырыу (оҡшатыу) бар. Ике тиңдәш (ыңғай) нәмәне бер береһенә оҡшатыу йәки тиңдәш булмаған (ҡапма-ҡаршы) нәмәне сағыштырып ҡарау юлы менән ойошҡан йомаҡтар ҙа күп.

Бер үк йомаҡта бер нисә образ алынырға, йәғни бер нисә предметтең сифаты үҙ нәүбәтендә күсерелеп бирелергә мөмкин. Был осраҡта инде метафоралаштырыу процесе бер аҙ ҡатмарлаша төшә, йомаҡ үҙе лә бер нисә образлы быуындан торған берәмеккә әйләнә. Синтаксик планда ике бер тиң йәки бер нисә тиң киҫәктәрҙән торған һөйләмдәр барлыҡҡа килә. Әгәр инде «Өй башында алтын мөгөҙ» (ай) тигән йомаҡты беҙ бер быуынлы метафорик йомаҡ тип, йәғни алынған образдың сифатын хәбәр итеү аша еткергән ябай һөйләм тип әйтәбеҙ икән, «Башы — тараҡ, ҡойроғо — ураҡ» (әтәс) тибындағы йомаҡты инде был категорияға индереп булмай. Сөнки бында һүҙ, нигеҙҙә, бер предмет (әтәс) тураһында барһа ла, икенсе күренештәргә күсереп ҡарау (метафоралаштырыу) өсөн уның ике төрлө сифаты (башы һәм ҡойроғо) алынған. Ике сифатты тасуирләү бер-береһе менән йәнәш торған ике образ тыуҙыра һәм ошо нигеҙҙә ике быуындан, йәғни ике бер тиң киҫәктән торған ҡушма һөйләм барлыҡҡа килә.

Әлбиттә, бындай тиң киҫәктәр күберәк тә (өсәр, дүртәр, хатта алты-етешәр) булырға мөмкин. Ике бер тиң йәки күберәк киҫәктәрҙән ойошҡан йомаҡтар, мәҡәлдәр һымаҡ, йәнәшәлек (параллелизм) принцибен ҡабул итәләр. Был йәнәшәлектең ыңғай һәм ҡаршы (антитеза) күренештәре булыуы мөмкин. Ыңғай йәнәшәлек үрнәген беҙ: «Ялт-йолт итә, ялмап йота» (бесән сабыу), «Ултырғаны — уба, баҫҡаны баҡыр һаба» (өҙәнге) тигән йомаҡтарҙа һәм тиҫкәре йәнәшәлек үрнәген «Ямауы бар, йөйө юҡ, ҡалаһы бар, өйө юҡ» (карта) тигән йомаҡта күрә алабыҙ.

Йомаҡтарҙа ҡулланыла торған һ ү р ә т л ә ү с а р а л а р ы метафоранан тыш, нигеҙҙә, шул сағыштырыу, оҡшатыу кеүек формаларға ҡайтып ҡала тип, юғарыла бер ишара яһалғайны. Сағыштырыуҙарҙың да, оҡшатыуҙарҙың да, әлбиттә, күп төрлөһөн осратырға мөмкин. Йыйып әйткәндә, уларҙы ла ике категорияға (ыңғай һәм ҡаршы) бүлеп була. Мәҫәлән: «Тышы шарҙай, эсе ҡандай, тәме балдай» (ҡарбуз) тигән йомаҡ ыңғай сағыштырыуға миҫал булһа, «Ағас түгел — япраҡлы, тун түгел — тегелгән» (китап) тигән үрнәк кире сағыштырыу формаһына миҫал булып тора. Оҡшатыуҙар буйынса ла ошондай уҡ принципкә ҡоролған, шундай уҡ типтағы йомаҡтар тураһында һүҙ йөрөтөргә тура килер ине.

Йомаҡ жанры шулай уҡ халыҡтың йәнле телендә таралған

йөнләндереү саралары киң ҡулланыла. Был осраҡта бер ниндәй ҙә сағыштырыу, йәғни бер сифатты икенсе урынға күсереү булмай. Бәлки, йәнһеҙ предмет, йәки абстракт төшенсә (күренеш) йәнләндереү юлы менән образландырыла. Мәҫәлән, «Аяҡһыҙ, ҡулһыҙ күлдәк кейә» тигән йомаҡтағы яҫтыҡ образы икенсе предметтең сифатын күсереү юлы менән түгел, бәлки йәнләндереү юлы менән барлыҡҡа килә. Шулай уҡ: «Ашай ҙа ашай, бер ҙә туймай» (ут); «Эсә лә эсә, бер ҙә ҡанмай» (ер) кеүек йомаҡтарҙың ҡоролошонда ла ошо уҡ принципте күрергә мөмкин.

Һорау йомаҡтар, ҡоролошо яғынан улар метафорик йомаҡтар шикелле ҡатмарлы түгел. Йомаҡ һорау формаһында ҡойола һәм уға ҡаршы табылдығы (йомолдоғо) әйтелә. Шулай итеп, йомаҡты әйтеү (йәғни йомаҡ ҡойоу) һәм табыу үҙе бер күңелле диалог формаһын ала.

Ләкин, ғәҙәттә, бирелгән һорау (йомаҡ) йә көлкөлө, йә кинәйәле булырға тейеш һәм шуға нисбәтен уның йомолдоғо ла көтөлмәгәнсә тапҡыр булырға тейеш. Мәҫәлән, «Һыуҙа ниндәй таш булмай?» (ҡоро таш); «Әҙәм башына нимә ҡуна?» (бүрек); «Атайыңдың улы, үҙе һиңә туған түгел, кем ул?» (һин үҙең) һәм башҡа шундай тапҡырлыҡ, зирәклек уята торған мәрәкәле һорау-йомаҡтарҙың өлгөләрен күп кенә килтерергә мөмкин. Бындай типтағы йомаҡтарҙа кешенең иғтибары ниндәй ҙә булһа образ тирәһендә түгел, бәлки ғәҙәттә булмағанса сәйер тойолған һорау аша көтөлмәгәнсә асылырға тейеш булған предмет (күренеш) тирәһендә туплана.

Һорау йомаҡтар эсендә һирәкләп булһа ла күп быуынлылары ла осрай. Ләкин, шуныһы ҡыҙыҡ, был осраҡта йәнәш быуындарҙы тәшкил иткән тиң киҫәктәр булып һорау йомаҡ үҙе түгел, бәлки уның яуабы (йомолдоғо) килә. Бына, мәҫәлән, шундай һорау йомаҡ өлгөһөнә күҙ ташлап үтәйек:

— Ни нәмәлә ни нәмә юҡ?

Яуабы:

— Атта мөгөҙ юҡ,
Һыйырҙа ял юҡ,
Ҡошта һөт юҡ,
Ташта тамыр юҡ,
Йоморҡала йөй юҡ.

Күренеүенсә, был йомаҡтың үҙе түгел, бәлки уның йомолдоғо (яуабы) ҡатмарлы, күп быуынлы булып ойошҡан. Бындай миҫалдар күп түгел. Ләкин аҙ булһа ла уларҙың булыуы йомаҡтарҙың ҡоролошона шаҡтай ҡыҙыҡлы үҙенсәлек индерә һәм уларҙың формаһын төрләләндерә, байыта.

Арифметик йомаҡтарҙың үҙәгендә ниндәй ҙә булһа күсерелгән конкрет образ түгел, бәлки кешенең зирәклеген һәм тапҡырлығын талап итә торған иҫәп-хисап, һан тора. Арифметик йомаҡтар ҙа, һорау йомаҡтар шикелле, диа-

лог формаһында ойошалар. Ниндәй ҙә булһа ваҡиғаға йәки күренешкә бәйләп йәшерелгән (йомолған) һанды эҙләп һорау бирелә, шул һорауҙың яуабы (йомолдоғо) булып табылған һан йәки һандар әйтелә.

Арифметик йомаҡтар араһында ҡапыл яуап талап иткән тура һораулы, бер-ике быуынлылары булған кеүек, бер нисә тиң киҫәктәрҙән торған күп быуынлыларын да осратырға мөмкин. Мәҫәлән:

Ике һигеҙ — ун алты,
Тағы һигеҙ, тағы алты.

Йәки:

Ҡырҙа ҡырҡ бағана,
Бағана һайын ҡырҡ ҡулса,
Ҡулса һайын ҡырҡ ҡолонсаҡ,
Барыһы нисә ҡулса ла
Барыһы нисә ҡолонсаҡ?

Шул рәүешсә, тәүге ике миҫал ике бер тиң киҫәктән торһа, һуңғыһы биш быуындан, йәғни бер үк характерҙағы биш киҫәктән ойошҡан һәм, күренеүенсә, был миҫалдарҙа ниндәй ҙә булһа төрөлгән образ аша кәрәк предметте эҙләү бурысы ла ҡуйылмаған. Был йомаҡтар һан эҙләүгә ҡоролғандар. Уларҙың йомолдоғо булып табыласаҡ һан (һандар) төркөмө килә.

Арифметик йомаҡтарҙа ҡуйылған маҡсатҡа ниндәй ҙә булһа хәрәкәтте, ваҡиғаны тасуирләү аша ирешеү күренештәре лә йыш ҡына осрай. Бындай осраҡта алынған ваҡиғаны берҙәм сюжет һыҙығы аша күрһәтергә тырышыу тенденцияһы билдәләнә. Шундайҙарҙың миҫалы итеп «Йөҙ ҡаҙ» тигән сюжетле йомаҡты күрһәтергә мөмкин. Бындай йомаҡ тыңлаусыға һорау юлы менән түгел, һөйләп биреү юлы менән еткерелә.

«Бер төркөм ҡаҙ осоп бара икән. Берәү осраған да сәләм биргән: «Әссәләмәғәләйкем, йөҙ ҡаҙ». «Юҡ, беҙ йөҙ түгел, тигәндәр ҡаҙҙар, — тағы ошо хәтле, ошоноң яртыһы хәтле, ошоноң сиреге хәтле булһа, шуның өҫтәүенә тағы һин дә килеп ҡушылһаң, йөҙгә тулған булыр инек».

Йомаҡтарҙың ҡоролошо, ҡайһы бер художество үҙенсәлектәре буйынса күҙәтеүҙәр, нигеҙҙә, шуларға ҡайтып ҡалалар.

Шул рәүешсә, йомаҡ жанры халыҡ ижадының киң океанында ятҡан ғәжәп үҙенсәлекле байлыҡты — һүрәтләү сараларын, художестволы алымдарҙы үҙенә туплаған матур һәм теүәл ижад төрө булып күҙ алдына баҫа.

ӘҘӘБИӘТ

Башҡорт халыҡ йомаҡтары. (Төҙөүселәр К. Мәргән, Ф. Надршина, Кирәй Мәргән редакцияһында). Өфө, Башкнигоиздат, 1968.

Башҡорт халыҡ ижады. Йомаҡтар. (Төҙөүсеһе Ф. Надршина. Кирәй Мәргән редакцияһында). Өфө, Башкнигоиздат, 1979.